ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14-20 май (һабанай) 2016

№20 (698)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ауылдарыбыҙҙы...**

һаҡлап ҡалыу юлдары бар



3

**Ҡыйратылған яҙмыштар**



7

**Берҙәм дәүләт имтиханын бирергә кәрәк,**



бирмәһәң дә ҡурҡыныс түгел... 8-9

**Инфекциялар ҙа йоҡлап ала....**



12

**ТВ-программа** 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө"гә 12 майҙан иғлан ителгән ташламалы яҙылыу көндәрен күҙҙән ысҡындырмағыҙ. 22 майға тиклем дауам итәсәк ун көнлөктә гәзитебеҙгә 494 һум 70 тингә, һуғыш ветерандары һәм инвалидтары 437 һум 76 тингә (индекс ВО665), предприятиелар һәм ойошмалар 524 һум 70 тингә (индекс ВО673) яҙыла аласаҡ.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ғаиләгә ҡағылышлы закондар күп, ләкин беҙҙең халыҡта борон-борондан ғаилә традициялары ла ҡанун көсөнә эйә булып килде. Һеҙҙең ғаилә ниндәй закондар буйынса йәшәй?

***Рәүеф БИКТАШЕВ, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** 15 майҙа билдәләнәсәк Халыҡ-ара ғаилә көнөнә ҡарата бик матур, урынлы һорау был. Һәр ғаиләнең нигеҙендә иң әүәл әҙәп тигән яҙылмаған закон ята, минеңсә. Шул осраҡта ғына ике кешенең берләшеүе ныҡлы һәм ышаныслы була, тип әйтә алам. Халҡыбыҙҙың ғаилә традициялары бай, күп төрлө, һәм уларҙың барыһы ла фәҡәт ғаилә ныҡлығын һаҡлауға, уның именлеген ҡурсалауға йүнәлтелгән. Әсәйҙәр, өләсәй һәм ҡартәсәйҙәр тәрбиәһенән күренеүенсә, ҡыҙҙарҙа - буласаҡ ғаилә әсәләрендә ир-егеткә, ул хатта бәләкәй генә малай булған хәлдә лә, бер тигеҙ ҡараш - ихтирамлы мөнәсәбәт күңелдәренә һеңдерелгән. Бындай тәрбиә үҙ емешен бирмәй ҡалмаған. Үҙегеҙгә лә мәғлүм: борон башҡорттарҙа айырылышыу тигән нәмә бөтөнләй булмаған тиерлек. Был ҡайһы берәүҙәрҙә, башҡорт ҡатындары хоҡуҡһыҙ булған, имеш, түҙеп йәшәргә мәжбүр ителгән, тигән хата ҡараш та тыуҙырып ҡуя. Был төптө дөрөҫ түгел, сөнки, төптән уйлап ҡарағанда, элек бит осраҡлы никахтар ҙа булмаған, тип әйтерлек. Бында ла әлеге йолаларыбыҙ ярҙамға килгән: йәштәрҙе алдан йәрәштереп, бер-береһенең ете быуынын энәһенән-ебенә тиклем тикшереп сыҡҡандар. Был да үҙ һөҙөмтәһен биргән: ике йүнле, эшсән, ипле кеше, әлбиттә, матур ғаилә ҡороп йәшәп киткән, балалар үҫтергән - айырылышыу тигән нәмә баштарына ла инеп сыҡмағандыр, моғайын. Һәр хәлдә, мин быны үҙемдең, шулай уҡ ҡатыным Әминә Вәли ҡыҙының, атаәсәләребеҙ, ҡартатай-өләсәйҙәребеҙ миҫалынан сығып әйтәм. Ул ваҡыттар беҙҙең яҡшы хәтерҙә әле. Ҡатындар ғүмер-ғүмергә үҙ тәғәйенләнешен, ғаиләлә үҙ урынын белеп, "Ир - баш, ҡатын - муйын" тигән яҙылмаған законға буйһоноп йәшәне. Ирҙе ир итә белделәр, шуға ла кәрәк сағында һүҙҙәрен дә һүҙ итә алдылар. Ирҙе беренсе урынға ҡуйып, ата һүҙенә ҡеүәт биреп, уның абруйын күтәрә белеүе башҡорт ҡатындарының аҡылын, әҙәплелеген, сабырлығын күрһәтеп тора ине бит асылда. Ирен, балалары атаһын ҙурлауы - ысынында иһә ҡатындарыбыҙҙың үҙҙәрен ҙурлауы бит ул. Ә инде хурлаһа, был үҙен хурлауға бәрәбәр булыр ине. Бына бит нисек: ике кеше ғүмергә бер сылбырҙа, тик улар бер-береһенә тотҡон да, дошман да түгел, ә ғаилә ныҡлығын, балалары именлеген, ҡыҫҡаһы, түңәрәк кенә донъяларын ҡоршап тороусылар. Үҙебеҙгә килгәндә, шөкөр, ата-бабаларыбыҙ аҡылына таянып ғүмер иттек, икебеҙ ҙә ғүмер буйы уҡытыу-тәрбиә өлкәһендә эшләп, хаҡлы ялға сыҡтыҡ. Балаларыбыҙ бөтәһе лә юғары белем алып, матур ғаилә ҡорҙолар. Ейән-ейәнсәрҙәр, бүләләребеҙгә ҡыуанып ғүмер итәбеҙ. Шулдыр, күрәһең, ғаиләнең яҙылмаған законы - бәхетле ата-әсә, артабан ҡартатай-өләсәй булып йәшәү.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ*




*Материалды 4-се биттә уҡығыҙ.*

*ЯҠШЫ ХӘБӘР!*

## МАЙҘАНҒА - БАШҠОРТ КЕЙЕМЕНДӘ



**28 майҙа "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә Өфөлә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы һәм Өфө округы хакимиәтенең Мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы ойошторған Башҡорт милли кейеме көнө уҙа.**

Байрам программаһында тамашасылар менән "Башҡортса кейен" флешмобы, башҡорт кейеме буйынса уйын-викторина, "Мин башҡорт кейемендә!" билдәһе менән селфи-шоу ойоштороу ҡаралған. Шулай уҡ "Башҡорт кейемендәге ҡурсаҡ", этнография һәм сәхнә костюмы, башҡорт халҡының ҡулланма-биҙәү сәнғәте күргәҙмәләре эшләйәсәк һәм милли аш-һыу тәмләп ҡарарға мөмкин буласаҡ. Оҫталар һәм коллективтар күргәҙмә-йәрминкәлә байрам ҡунаҡтары өсөн үҙҙәренең әйберҙәрен тәҡдим итәсәк. Өфөләрҙе һәм баш ҡала ҡунаҡтарын милли костюмдарҙа йөрөш, "Еләм, кәзәкей..." тип аталған инсталляция, "Йәйләү" тарихи реконструкцияһы көтә. Республика байрамы "Традицион башҡорт кейеме", "Башҡорт сәхнә костюмы", "Заманса кейемдә башҡорт элементтары", "Ике нөктә" балалар кейеме, "Пар күгәрсен" башҡорт кейемендәге иң матур пар номинациялары буйынса дефиле менән тамамланасаҡ.

12+

*✓ Иман юҡ икән - ғаилә лә юҡ. Шуға ла донъя көткәндә кешенең әхлаҡ сифаттары иң беренсе урынға сыға. Сабырлыҡ, намыҫ, ғәфү итә белеү, ғәҙеллек - бына ошондай ҡанундар буйынса йәшәгәнгә лә ата-әсәләребеҙ беҙҙең өсөн өлгө.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТАҘАЛЫҠҠА ЫНТЫЛАЙЫҠ!

***Ирек БАСИРОВ, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте хеҙмәткәре:*** Элек ата-бабаларыбыҙ тәбиғәткә ҡарата ифрат һаҡсыл мөнәсәбәттә булған. Тиктомалға хатта үләндең бер ҡыяғын өҙөү ҙә зыянлы эш һаналған. Кеше үҙ өйөн таҙа тотҡан кеүек, тирә-яғында ла тәртип һаҡлаған, киләсәк быуынға аманат итеп тапшырыу тураһында уйланған. Бөгөн беҙ ошо мөһим бурысыбыҙ тураһында онотоп, тәбиғәт хаҡында хәстәрлек күрмәйбеҙ. Донъяның кеше аяғы баҫмаған урындарын һанамағанда, сүп-сар ташланмаған ер ҙә ҡалмаған төҫлө. Беҙҙең йәшәйеште еңелләштергән әйберҙәр тәбиғәткә зыянлы икән, тимәк уларҙы үтилләштереү һәм эшкәртеү ысулдарын камиллаштырырға кәрәк. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, күптәр быға әһәмиәт бирмәй. Юл ыңғайында аҙыҡты һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән полиэтилен ҡапсыҡтарҙы, пластик шешәләрҙе, тәмәке төпсөктәрен һәм башҡа кәрәге бөткән әйберҙәрҙе ташлап китеү күптәрҙең ғәҙәтенә ингән. Ошо алама холоҡтан арынмаһаҡ, хозур тәбиғәтле Башҡортостаныбыҙ тиҙҙән сүп-сар ояһына әйләнеүен көт тә тор.

Белеүебеҙсә, хәҙер республикалағы бик күп шишмә һәм йылғаларҙан эсергә һыу алып булмай, көслө ағымлы, тәрән йылғалар һайыға. Күлдәр тураһында әйтеп тораһы ла түгел, ял итергә барған һәр кешенең артынан өйөлөп ҡый ятып ҡала. Уларҙы киҫәтеп, йә ҡаты закондар ярҙамында тыйып, тәртипкә күндереп булмай. Бары тик тәрбиә ярҙамында, һәр кем үҙенең матур өлгөһө арҡылы ғына тәбиғәткә зыян килтермәҫкә өйрәтергә мөмкиндер. Бының өсөн йәштәрҙе һәм балаларҙы йәлеп итеп, экологик өмәләр үткәрергә, макулатура тапшырыу ғәҙәтен кире тергеҙергә һәм башҡа масштаблы акциялар ойошторорға кәрәк. Иң мөһиме, ҡый ташланған урынды күрһәк - таҙартырға тырышайыҡ, битараф ҡалмайыҡ. Сөнки беҙҙең битарафлыҡ киләсәк быуынды тәбиғәттең матурлығынан мәхрүм итеүҙән тыш, төрлө сир, ауырыуҙарға дусар итеүе лә бар.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғаиләгә ҡағылышлы закондар күп, ләкин беҙҙең халыҡта борон-борондан ғаилә традициялары ла ҡанун көсөнә эйә булып килде. Һеҙҙең ғаилә ниндәй закондар буйынса йәшәй?

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, хеҙмәт ветераны:*** Ғаилә - ул нәҫелебеҙ, милләтебеҙ, кешелек киләсәге. Татыу, сәләмәт ғаилә, тимәк, Ер йөҙөндә яҡшылыҡты, яҡтылыҡты ишәйтеүсе, рухиәтебеҙҙе сафландырыусы, иманыбыҙҙы тотоп тороусы. Ғаилә, никах мәсьәләләре иманыбыҙҙан айырылғыһыҙ ул. Мосолман халҡы өсөн төп ҡанундар йыйылмаһы булған Ҡөрьән-Кәримдең һәр аят, доғалары беҙҙе иманыбыҙҙан айырылмаҫҡа саҡырып тора. Иман юҡ икән - ғаилә лә юҡ, тимәк. Шуға ла донъя көткәндә кешенең әхлаҡ сифаттары иң беренсе урынға сыға. Сабырлыҡ, намыҫ, ғәфү итә, кисерә белеү, ғәҙеллек - бына ошондай ҡанундар буйынса йәшәгәнгә лә ата-әсәләребеҙ беҙҙең өсөн өлгө булып тора. Әсәйем беҙҙе, ҡыҙҙарын, элек-электән "Барған ереңдә таштай бат", тигән аҡылға нигеҙләнеп үҫтерҙе. Иргә генә түгел, уның туғандарына, айырыуса ҡәйнәгә ярай белеүҙең дә буласаҡ ғаилә өсөн ти тиклем мөһим булыуын аңға һеңдерә халыҡ аҡылы. Юҡҡа ғына, "Килен - ҡәйнә тупрағынан" тип әйтмәйҙәр, күрәһең. "Ир күрке - ҡатын, ҡатын күрке - ир" тигәне иһә бер-береңә таяныс булып, бер-береңде игәмәй, аңлашып ғүмер итеүгә, шул юл менән генә кешелеклегеңде, үҙ йөҙөңдө һаҡлап ҡалыуға яҡшы ишара. Юғиһә, бөгөн, тормошобоҙҙан Ислам тәрбиәһе юҡҡа сығарылыу арҡаһында эскелек, ғаилә ғауғалары, хыянат кеүек яман ғәҙәттәр өҫтөнлөк алып, ғаиләләр тарҡалыуы ғәҙәти хәлгә әйләнде. Бәхеткә күрә, никах уҡытып, өйләнешеү, сабыйға мулланан исем ҡуштырыу, мәрхүмдәр рухына аяттар бағышлатыу, эскеһеҙ туйҙар үткәреү йолалары күп урындарҙа тергеҙелә бара. Беҙҙең Мәләүез яҡтарында, шөкөр, айырылышыусылар һаны башҡа төбәктәргә ҡарағанда әллә ни күп түгел. Йәштәр ҙә ғаилә ҡороуға етдиерәк ҡарай башланы һымаҡ тойола миңә.

***Илһам ИБРАҺИМОВ, кесе эшҡыуар:*** Ғаилә ҡороуыма биш йыл ғына әле. Кем булһа ла миңә хәҙер барыбер, тип, битараф ҡына өйләнгәйнем. Йәшәп, бер-беребеҙҙе яҡынырaҡ белгәс, кәләшемә көндән-көн иғтибарым да, ихтирамым да арта барғанын тоям. Атай-әсәйемә, еңгәмә рәхмәтлемен: улар димләүе буйынса күрше ауылдан әйттергәйнек кәләште. Янып-ярһып һөйөү иһә бынан алдараҡ булып алды. Дуҫлашып, армиянан ҡайтыуымды көтөргә вәғәҙә биреп ҡалған ҡыҙ ҡалаға китеп, ҡатынын айырған бер кешегә тормошҡа сығып өлгөргәйне. Ҡарт кейәү фатиры, "текә" машинаһы менән арбаған, тиненләр. Ваҡытында бындай хыянатты кисереүе еңел булмаһа ла, әкренләп һыуындым. Кәләшем бер ул, бер ҡыҙ табып бирҙе. Ғаилә өсөн генә яралған, тиерһең, яҙмышымды уның менән бәйләргә ҡарар итеп, яңылышманым, шуға һөйөнәм. Ул минең күңел яраһына шифа ла булды, аҡылы, сабырлығы, уңғанлығы менән дә арбаны. Үҙҙәрендәге башланғыс кластарҙа уҡытып йөрөй ине, ә беҙҙең мәктәптә урын булманы. Тик мин уның өйҙә хужабикә булып, балалар ҡарап ултырыуын ғына теләйем. Ҡулынан килмәгән эше юҡ. Яңы һалып ингән йортобоҙ гөлсәскәгә күмелде, баҡса үҫтерә, мал-тыуар, ҡош-ҡорт ҡарай ҡатыным. Мин эштән бушағанда бергәләп тә тотонабыҙ. Тик ял минуттары һирәк эләгә миңә: таҡта ярыу цехы астым, ҡустым менән мебель етештереү һәм йүнәтеү эшен дә башлап торабыҙ. Ғаилә башлығы булараҡ, минең төп эшем - аҡса табыу, тип иҫәпләйем. Кәләшем дә һәр башланғысымды хуплап, дәртләндереп тора. Ниндәй закон буйынсалыр инде - уныһын үҙегеҙ әйтерһегеҙ, ә беҙ бына шулай йәшәйбеҙ һәм бик бәхетлебеҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Йортоғоҙҙа аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәгеҙ, "Киске Өфө"лө булығыҙ. Уға яҙылырға онотмағыҙ, таныш-тоноштарығыҙҙы ла был хаҡта иҫкәртегеҙ. Гәзитебеҙ тиражы - ул беҙҙең берҙәмлек, туғанлыҡ, яҡынлыҡ билдәһе лә икәнде онотмағыҙ берүк.**

Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торғаныбыҙҙы беләһегеҙ.




● Май айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**; **"400 башҡорт халыҡ йыры"**; **"Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** китаптарын, шулай уҡ 10 уҡыусы **"Матурлыҡ календары"н** алып ҡыуанасаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда алдан тауыш биреү өсөн өс телдә 920 мең бюллетень әҙерләнгән. "Берҙәм Рәсәй"ҙең алдан тауыш биреү көнөндә ҡатнашыусылар өс телдең береһендә тауыш биреү өсөн бюллетень һайлай ала. Әйтеүебеҙсә, 22 майҙа алдан тауыш биреүҙәр ойошторола. Әле кандидаттар һайлаусылар менән осраша һәм дебаттар ойошторола. Башҡортостанда алдан тауыш биреүҙә 107 кеше ҡатнаша, шуларҙың 46-һы "Берҙәм Рәсәй" партияһы ағзаһы түгел.

✓14 майҙан Башҡортостанда егеттәрҙе Ҡораллы Көстәргә оҙатыу башланды. Яҙғы саҡырылышта хәрби хеҙмәткә алыныусылар Мәскәү һәм Архангельск өлкәләрендә урынлашҡан Ҡоро ер ғәскәрҙәре, Хәрби-йыһан көстәре сафын тулыландырасаҡ. Башҡортостан егеттәре шулай уҡ Көнбайыш һәм Көньяҡ хәрби округтарының Ҡоро ер ғәскәрҙәренә, Һауа-йыһан көстәренә, Һауаға ҡаршы оборона ғәскәрҙәренә оҙатыла. Яҙғы саҡырылышта республиканан 5300-ҙән ашыу егет хәрби хеҙмәткә алынасаҡ.

✓Башҡортостанда күпселек майҙандарҙа урмандар тергеҙелгән. Республика Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, әлеге мәлдә 5260 гектарҙа (77 процент) сәселгән. Шуларҙың 64 процентын урманды ҡуртымға алыусылар эшкәрткән. Мәҫәлән, Башҡортостан урман сәнәғәте компанияһы - 177 гектар, Өфө фанера-плита комбинаты - 23, Өфө фанера комбинаты 8 гектар майҙанда урман тергеҙеү эштәрен башҡарған.

✓19 майҙа Башҡортостан Хөкүмәте Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында 2015 йылда дәүләт милкен хосусилаштырыу һөҙөмтәләре тураһында отчет бирәсәк. Депутаттар бөтәһе 50-гә яҡын мәсьәләне ҡарарға ниәтләй. Закон сығарыусылар иғтибарына тәүге тапҡыр "Башҡортостан Республикаһында өлкән йәштәге кешеләр һәм инвалидтар өсөн тәрбиәгә алыусы ғаиләләр тураһында"ғы закон проекты тәҡдим ителә. Ул өлкән йәштәге кешеләрҙе һәм инвалидтарҙы ғаиләгә урынлаштырыуҙы күҙ уңында тота.

✓Быйыл Башҡортостан ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларҙың ялын ойоштороу һәм уларҙы һауыҡтырыу өсөн 85,9 миллион һум аласаҡ. Аҡса балалары булған ғаиләләрҙе социаль яҡлау буйынса бурыстарҙы башҡарыу сиктәрендә берлектә финанслау шарттарында федераль ҡаҙнанан бүленә.

✔ *Ауыл хакимиәте башлығы үҙ ихатаһында тырышып мал аҫраған ауылдашына, әйҙә, хужалығыңды тағы ла киңәйт, уның бына ошо һәм ошо юлдары бар, тип йөрөмәй. Урындағы түрәгә был кәрәкмәй.*



*УЙЛЫҒА -УЙ*

# АУЫЛДАРЫБЫҘҘЫ...

## һаҡлап ҡалыу юлдары бар

**Ер һатыу, йәштәрҙең ауылдан китеүе, ауыл иҡтисадының күрсөккә терәлеүе, эшһеҙлектең һәм эскелектең сәскә атыуы - был хәүефле темаларҙы "Киске Өфө" гәзите даими күтәрә килә. Милләт бишеге ауыл булғанға күрә, бындай эстәлекле мәҡәләләрҙе уҡыуы ауыр. Иманым камил: тыуған төйәгенә ҡайтҡан һәр кем, сәселмәгән баҫыуҙарға, элекке дөйөм хужалыҡтың производство базаһы урынында ҡалған харабаларға бағып, үҙенә "Нишләп?" тигән һорау бирә һәм яуабын таба алмай.**



"Ауыл тимерлегенең уты һүнгән, был ваҡытта баҫыу ҡырҙарын иңләгән техника, ни ғилләменәндер инде, юҡҡа сыҡҡан, ырҙын табағында бер ус ашлыҡ юҡ, фермаларҙа мал мөңрәгән тауыштар ишетелмәй. Инде нисәмә йыл орлоҡ төшмәгән баҫыуҙар ҡыҫырға ҡалған, уларҙы ҡарағура баҫҡан. Һабан турғайҙарының һайрауын тыңлаған ҡарт игенсе ниҙәр кисерәлер инде был көндәрҙә? Әйтеүе ауыр. Ғөмүмән, элек ҡайнап торған ауыл, мәрткә киткәндәй, ауыр йоҡоға талған хәҙер. Ауыл халҡы, ҡалалар кеүек, яҙҙы тәбиғәттең йәмле күренеше булараҡ ҡына күҙәтә, уны, сәсеү, киләсәккә нигеҙ һалыу осоро, тип ҡабул итеүҙе онотоп бара. Үкенесле үҙгәреш!"

Өс йыл элек мин дә республика гәзиттәренең береһендә сыҡҡан мәҡәләмде, әсенеп, шулай башлағайным. Бөгөн иһә фекерем башҡараҡ. Ауыл ерендә хәл ҡырҡа үҙгәрҙе, тип әйтеүе дөрөҫ үк булмаһа ла, саҡ ҡына оптимизм өсөн урын булыуын билдәләп үткем килә. Эйе, ул әлегә төҫмөрләнә генә. Һәм бына нимәләрҙән ғибәрәт күңелгә йылы өргән һиҙелер-һиҙелмәҫ был үҙгәреш.

Иң ҡаты алышта еңеүгә күп осраҡта һан һәм ҡорал яғынан өҫтөнлөк түгел, ә дөйөм кәйеф, рухи күтәрелеш, маҡсатты дөрөҫ ҡуйыу һәм уға диҡҡәт биреп ынтылыу килтерә. Әлбиттә, бөгөн ауыл ерлегендә был тиклем кәйеф күтәренкелеге юҡ. Тағы ҡабатлап әйткем килә: ул тик бөрөләнә, төҫмөрләнә генә. Ауылда эш юҡ, тип зарланып, түбәгә төкөрөп диванда ятҡан, дөйөм хужалыҡтарҙы тарҡатыуҙа ғәйепләп, түрәләрҙе, дәүләт хужаларын әрләп, үҙеңдең булдыҡһыҙлығыңды аҡларға маташҡан заман яйлап ҡына сигенә, тарихта ҡала бара. Ирҙәр ситкә йөрөп булһа ла аҡса таба, шәхси хужалығын киңәйтә, башҡа кәсеп менән булыша, эш аса. "Иген сәсеп ҡарарға ине", тигән ниәтен йәшермәгәндәр ишәйә. Фермерҙар ергә ныҡыраҡ ерегә, айырым хужалыҡ итеүҙең серҙәренә тәрәнерәк төшөнә бара. Үҙҙәрен хәҙер ышаныслыраҡ, иркенерәк тоялар улар, ауыл яҙмышы үҙҙәренең ҡулына ҡалыуын аҙағына еткәнсе аңламаһалар ҙа, быны һиҙемләйҙәр. Тәүәккәлерәктәре, батыр йөрәклеләре, ил яҙмышын үҙҙәренекенән айырмағандары тыуған төйәк хәстәрен үҙ иңенә алды ла инде. Тик әлегә һирәгерәк ундайҙар.

Иң ауыры - кешене эшкә көйләүе. Ауыл, ниһайәт, ең һыҙғанған икән, быны эләктереп алмау, күтәрмәкләмәү халҡыбыҙ алдында енәйәт булыр ине. Телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ ҡыҫырыҡлана, милләт яҙмышы хәүеф аҫтында, тип күп һөйләйбеҙ, яҙабыҙ. Үкенескә ҡаршы, был шулай. Дөйөм глобалләшеү заманында башҡаса булыуы мөмкин дә түгел. Беҙ Амазонка шырлығында ҡамалып йәшәгән ҡәбиләләргә тиңләшә алмайбыҙ: йәштәр ҙур ҡалаларға уҡырға китә, эшкә бөтә ил буйлап таралалар, хатта сабыйҙар ҙа интернет, телевизор аша донъя гиҙә, үҙҙәрен айырым милләт, билдәле ерлектәге йәмғиәт ағзаһы итеп түгел, ә иң элек дөйөм кешелек вәкиле булараҡ танып үҫә. Ҡала мөхитендә тәрбиәләнгән бала, булмышы менән, ғөмүмән, космополит, тиһәм, артыҡ яңылышмамдыр. Уларҙың күп тигәндә 20-25 проценты ғына, ҙурайғас, әсә телендә аралаша алыу һәләтен һаҡлап ҡала. Өйҙә теле башҡортса асылған сабый балалар баҡсаһына барһа, хатта башҡорт төркөмөндә йөрөп тә, русса һөйләшеүгә күсә. Күктән алып түгел, ә туғандарымдың, дуҫ-иштәремдең балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә ҡарап раҫлайым быны. Үтә лә үкенесле һәм йән әсеткес хәл был. Ҡала ерлегендә ҡатнаш никахтар бик күп. Был да башҡортто ассимиляция упҡынына илткән юл.

Алыҫтан башлаған һүҙемдең мәғәнәһе шунда: милләтте һаҡлайыҡ тиһәк, ауылды күтәрергә кәрәк. Иң ышаныслы юл, иң һөҙөмтәле эш был юҫыҡта фәҡәт ошо булыр. Хәйер, мин хәҡиҡәт асмайым, тик билдәле аксиоманы ҡабатлайым, бөгөнгө мәлдең был ғәмәл өсөн үтә лә ҡулай булыуын аңғартам, иҫкә төшөрәм.

### Ҡайҙан башларға, нисек тотонорға?

Киләсәген уйлаған ауыл кешеһе өсөн был һорауҙарға анығ яуап алыу үтә лә мөһим. Сөнки уның аҡсаһы юҡ, хөкүмәт ярҙамына ышанып етмәй, кредиттан ҡурҡа, түрәләр менән һөйләшә белмәй. Хатта хәләл көсөн түгеп үҫтергән һуғым малын баҙарға алып барып үҙе һатырға йөрьәт итмәй, осһоҙға ғына алыпһатарға тоттороп ебәрә.

Һуңғы ун-ун биш йыл дауамында Татарстандан килеп, Урал аръяғы райондарынан быҙау йыйып алалар. Илле-алтмыш килограмлыҡ өс-дүрт айлыҡ быҙауҙы халыҡ ҡыуанып ун ике-ун биш мең һумға тотороп ебәрә уларға. "Алты айҙа ошо быҙауҙы дүрт йөҙ килограмм ауырлығына еткерәбеҙ. Һеҙҙең яҡ малының иммунитеты көслө, ашатһаң, тиҙ йоға", - тиҙәр татар ҡәрҙәштәр. Сер итеп шуны ла өҫтәйҙәр: үҫеүгә йоғонто яһаған стимуляторҙар ҡулланалар, төрлө препараттар ҡаҙайҙар икән малҡайҙарға. Быныһын һүҙ ыңғайында ғына әйтеүем һәм ул күтәрелгән мәсьәләгә ҡағылмай.

Ғөмүмән, Татарстанда малсылыҡ - дәүләт кимәленә күтәрелгән иҡтисади йүнәлеш. Ауылдарҙағы халыҡ, һимерткән малды ҡайҙа ҡуйырмын, нисек һатырмын, тип аптырау түгел, был турала уйламай ҙа. Барыһы ла көйләнгән, юлға һалынған. Кемдер мал үҫтерә, икенсеһе - һуя, өсөнсөһө - һата. Тормоштарын барып күргән кешеләр, күршеләр етеш, бай йәшәйҙәр, тип һөйләйҙәр.

Тимәк, эшкә белеп тотонғанда, уны бергәләп ойошторғанда, беҙҙең ауылдарҙы ла күтәрергә мөмкин - шарттар, закондар, иҡтисади киңлек бер үк бит. Дәүләт, урындағы власть, йәмәғәтселек тотонорға тейеш бығa. Был тәңгәлдә бер ни ҙә эшләнмәй, тип әйтеп булмай. Дәүләт программалары ҡабул ителгән, ҙур ғына аҡса ла бүленә, райондар хакимиәттәрендә махсус мәғлүмәт үҙәктәре ойошторолған, йәмәғәтселек әленән-әле проблеманы күтәрә, мөрәжәғәттәр ҡабул итә. Тик һөҙөмтә самалыраҡ барыбер. Ни өсөн? Сөнки был эш формаль төҫ алған, ихласлыҡ, һөҙөмтәгә ынтылыу юҡ. Ауыл хакимиәте башлығы үҙ ихатаһында тырышып мал аҫраған ауылдашына, әйҙә, хужалығыңды тағы ла киңәйт, уның бына ошо һәм ошо юлдары бар, тип йөрөмәй. Уны етәкләп, район хакимиәте белгестәренә, банкка, башҡа урындарға йөрөтмәй. Урындағы түрәгә был кәрәкмәй, сөнки ул, күп осраҡта, барыһына ла битараф кеше.

Башҡорт ҡоролтайҙары был юҫыҡта ҙур һәм файҙалы эш атҡара алыр ине. Ғәҙәттә, битараф булмаған милләттәштәребеҙ ошо йәмәғәт ойошмаларына тупланған бит. Әгәр урындағы ҡоролтай һәр ауылда бер генә фермерҙы ҡурсалауға алып, аяҡҡа баҫтырһа, уларҙы район кимәлендә берләштерһә, уставында ҡаралған маҡсатҡа өлгәшкән, тип баһаларға мөмкин, минеңсә. Йыйылып алып, тел бөтә, мәҙәниәт үлә, тип бөтмәҫ хәбәр һөйләүҙән мең артыҡ булыр ине был эш. Ауыл йәшәһә, тел дә йәшәйәсәк!

**Байгилде МОТАЛЛАП.**
**(Дауамы бар).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ТОРМОШ МӘКТӘБЕ УЛ!



**"Киске Өфө"нө бик күптән, осраҡлы ғына ҡулыма бер һаны килеп эләккәне бирле, алдырам. Шәмбе көнөндә, яҡыныңды бик-бик көтөп алған кеүек һағынып алынған гәзит.**

Иҫ-аң белә башлағанынан алып, зиһенен юғалтмай ҡартая алғандарға тиклем - барсаһының зауығына яуап биргән баҫма ул. Бөтә рубрикалары ла көнүҙәк. Уның бер генә һаны ла "ҡартаймай" ҙа, "иҫкермәй" ҙә! Мәңгелектең үҙе кеүек. Аталар менән улдарға, йәштәр менән өлкәндәргә бүлмәй, бөгөнгөнө үткән һәм киләсәк менән бер бөтөн итеп ижад итеү - бик әҙҙәргә генә насип булған бәхет тип уйлайым. Ғаилә гәзите ул.

Фәнил Бүләковтың ошо шиғри юлдарын "Киске Өфө"ләр асылына ауаздаш күрәм:

*Нур эҙләйем һеҙҙең йөрәктәрҙән,*
*Балҡытырлыҡ Ерҙә йылы усаҡ.*
*Гәрәбәләр булып балҡыр ул нур*
*Өләшергә бер мәл ҡосаҡ-ҡосаҡ.*

Бер ыңғайҙан хөрмәтле "Киске Өфө" хеҙмәткәрҙәренә һаулыҡтарҙың ныҡтан-нығын, уңыштарҙың тосон, уҡыусыларҙың тоғроһон, шәхсән һәр берегеҙгә бәхеттәрҙең мөлдөрәмә тулыһын теләйем.

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостанда "Ҡоролтай тауышы" тигән яңы гәзит сыға башлай. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының мәғлүмәт сәйәсәте комиссияһы ултырышында шул хаҡта һөйләшеп килешелде. Мөмкинлектәрҙән сығып, тәүге мәлдәрҙә "Ҡоролтай тауышы"н "Башҡортостан" гәзитенә ҡушымта рәүешендә сығарыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. "Бөтә донъя ҡоролтайы гәзите халыҡ трибунаһына әүерелергә, башҡорт халҡының мөһим мәсьәләләрен күтәрергә тейеш. Тап шул саҡта ғына баҫма үҙенең маҡсатына ирешәсәк", - тип билдәләне яңы мәғлүмәт сараһының стратегияһын БДУ-ның журналистика кафедраһы профессоры, филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәков.

✔ 10-11 июндә Сибайҙа һәм Әбйәлил районында "Урал аръяғы-2016. Бәләкәй эшҡыуарлыҡ - идеянан алып тормошҡа ашырғанға тиклем" тип аталған эшҡыуарлыҡ форумы ойошторола. Форум эшендә яҡынса 250 делегаттың ҡатнашыуы көтөлә. Улар иҫәбендә федераль һәм төбәк власть органдары, бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ярҙам һәм уны үҫтереү институттары, илдең төп бизнес структуралары һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре бар. Сараның программаһында пленар ултырыш, экспозиция, тематик түңәрәк өҫтәлдәр, "Яҡтыкүл" шифахана-курорт зонаһында һабантуй үткәреү ҡаралған.

✔ Башҡортостан аграрийҙары 1034 мең гектарҙа, йәғни планлаштырылған майҙандарҙың яртыһында сәсеүҙе тамамлаған. 773 мең гектар майҙанда (58 процент) - иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар, 33,8 мең гектарҙа (68 процент) - шәкәр сөгөлдөрө, 141,6 мең гектарҙа (71 процент) - көнбағыш, 4,3 мең гектарҙа (22 процент) орлоҡҡа кукуруз сәселгән. Сағыштырыу өсөн: бер йыл элек төбәктә яҙғы сәсеү тәғәйенләнгән майҙандарҙың 19 процентында башҡарылған.

✔ Башҡортостан Хөкүмәте законһыҙ һаҡланған ҡорал һәм боеприпастарҙы үҙ ирке менән тапшырған өсөн граждандарҙы бүләкләү күләменә үҙгәрештәр индерҙе. Документтан күренеүенсә, хәрби ҡоралдың бер берәмеге өсөн 10 мең һумдан 25 мең һумғаса бүләкләү ҡаралған. Исемлектә шулай уҡ ҡулдан яһалған ҡорал, боеприпастар, шартлатҡыс матдәләр һәм шартлатыу ҡорамалдары бар.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Яҡын туғандарының фотоларын тотҡан халыҡтың "Үлемһеҙ полк" рәтенә ҡарап һоҡланмау мөмкин түгел ине! Әйтерһең, был көндә фронтовиктар тыуған яҡтарына ҡайтып, яҡташтары менән бергә 71-се Еңеү көнөн ҡаршы алды.*



## ТУҠТА, МӘЛ!



Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы.


Ишембай районы.


Асҡын районы.


Баймаҡ районы.


Салауат районы Малаяҙ ауылы.

## БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

**Бөйөк күрәҙәсе Ванганың: "Рәсәй, тереләр менән үлеләр бер сафҡа баҫҡас, ҡабат ҡеүәтен тергеҙәсәк", - тигән һүҙҙәрен һәр кем үҙенсә аңлатырға тырыша, әммә 9 Май - Еңеү көнөндә илебеҙ ауыл-ҡалалары буйлап "Үлемһеҙ полк" сафтары үтеүе барыбер ҙә күңелдәрҙә өмөт уятыр бер хәҡиҡәткә ишаралай һымаҡ. Халыҡ ошондай гражданлыҡ-патриотик акцияларҙы күтәреп ала икән, тимәк, уларҙа донъяны, тормошто яҡшыртыр, йәшәйешебеҙҙе дауам итер көс-ҡеүәт етерлек.**

# ТЕРЕЛӘР МЕНӘН БЕР САФТА



Был тантаналы ла, моңһоу ҙа көндә республика район-ҡалаларында ғына түгел, хатта ауылдарҙа ла тереләр менән бер ҡатарҙан "Үлемһеҙ полк" сафтарында исемдәре мәңгелек хәтеренә яҙылған яугирҙар ҙа атланы.

Ойоштороусылар белдереүенсә, быйыл акция 50 илдә уҙғарыла һәм башланғандан алып иң күләмлеһе була. Уға Рәсәйҙең Владивостоктан алып Калининградҡаса йөҙҙәрсә-меңдәрсә ҡала-район-ауылы, быйыл беренсе тапҡыр Бөйөк Британия, Греция, Испания һ.б. илдәр ҡушыла. Мәскәүҙә акция барлығы 700 мең кешене туплаһа, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Өфөлә 35 мең өфөлө яу яландарында ятып ҡалған, ошо көндәргәсә йәшәй алмаған Еңеү һалдаттарының фотолары беркетелгән транспаранттарҙы баш ҡаланың төп урамдарының береһе булған Октябрь проспекты буйлап тотоп үтте. Республиканың "Үлемһеҙ полк" колоннаһының башында Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡының һәм Ҡораллы Көстәрҙең фашизмды Еңеүенең рәсми символы булған Еңеү Байрағының күсермәһе елберҙәне. Тамашасылар менән бергә баш ҡалала был көндә байрам сараларында барлығы 51 меңдән ашыу кеше ҡатнашты.

"Үлемһеҙ полк" сафтарының тығыҙлығына республиканың һәр төбәге, һәр ауыл советы үҙ өлөшөн индерҙе. Мәҫәлән, Ишембайҙа акцияла - ике мең, Күмертау ҡалаһында өс мең самаһы кеше ҡатнашһа, Нефтекамала был һан ете меңгә еткән. Йылайыр районында мең самаһы кеше "Үлемһеҙ полк" сафында үткән. Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел, сөнки Бөйөк Еңеү - һәр өйгә килгән "ҡара ҡағыҙ"ҙар, хәсрәт, күҙ йәштәре аша яуланған бөйөк байрамыбыҙ ул.

Еңеү байрамы **Салауат районында** ла киң билдәләнде. Ҡулдарына флагтар, шарҙар тотҡан уҡыусылар бер рәткә теҙелеп, ветерандарҙы ҡаршы алды. Яу яланында ятып ҡалған, һуғыштан һуң ҡайтып һәләк булған батырҙарҙы бер минут тынлыҡ менән иҫкә алғас, сараға йыйылыусылар һәйкәлгә сәскә гөлләмәләре һалды. Артабан ветерандар һәм район халҡы тигеҙ сафҡа теҙелеп, Балалар сәнғәт мәктәбе оркестры оҙатыуында Малаяҙ ауылының үҙәк урамынан үтте. Бигерәк тә фронтовик атай-олатайҙарының, яҡын туғандарының фотоларын тотҡан халыҡтың "Үлемһеҙ полк" рәтенә ҡарап һоҡланмау мөмкин түгел ине! Әйтерһең, был көндә фронтовиктар тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтып, яҡташтары менән бергә 71-се Еңеү көнөн ҡаршы алды.

Йылдағыса, **Асҡын районында ла** байрам саралары район хакимиәте алдындағы майҙанда Хәтер мемориалына сәскәләр һалыуҙан башланды. Артабан "Үлемһеҙ полк" акцияһында ҡатнашыусылар Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан олатайҙары, туғандарының портреттарын тотоп, ғорур баҫып Еңеү парадында үтте. Сарала ҡатнашыусы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ғәлинур Шәйбәков һуғышта һәләк булғандарҙы хәтерләне, бөгөн арабыҙҙа булған ветерандарға сәләмәтлек теләне. Билдәләнеүенсә, райондан фронтҡа алты мең биш йөҙҙән ашыу кеше киткән, шуларҙың дүрт меңдән ашыуы яу ҡырында башын һалған. Бөгөнгө көндә ауыр йылдар тарихын 12 - һуғыш, 225 тыл ветераны һәм бер фашист концлагеры тотҡоно һаҡлай.

**Белорет муниципаль районының** һәр ауылында тиерлек тантаналы митинг, "Үлемһеҙ полк" акциялары ойошторолдо. Иң төпкөл ауылдарҙың береһе Ботайҙа Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары иҫтәлегенә һәйкәл асылды. Был изге инициатива ауыл халҡынан башланды һәм уны ауыл хакимиәте башлығы Рәил Ғәлиуллин, депутаттар күтәреп алып, ойоштороу эшен үҙ өҫтөнә алды. Үкенескә күрә, бөгөн был ауылда иҫән булған бер генә һуғыш ветераны ла ҡалмаған.

**Белорет ҡалаһы** һәм районынан 33 144 кеше һуғышҡа киткән һәм шуларҙың 10 993-ө яу яланында ятып ҡалған, 14 490 яҡташыбыҙ ғына тыуған еренә кире әйләнеп ҡайтыу бәхетенә өлгәшкән. Һуғыш ваҡытында күрһәткән батырлығы өсөн 13 яугир Советтар Союзы Геройы, бер яугир - Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған, бер кеше Хәрби Дан орденының тулы кавалеры. Әлеге ваҡытта районда 49 Бөйөк Ватан һуғыш һәм 900-ҙән ашыу тыл ветераны йәшәй.

**Ишембай районы Ҡолғона ауылында** үткән "Үлемһеҙ полк" акцияһында Бөйөк Ватан һуғышының бөтә һалдаттары ла - яу яландарында ятып ҡалғандары ла, тәпәй баҫҡан тупрағына ҡайтып вафат булғандары ла - тереләр менән бергә байрам майҙанына килде, фотоһүрәттәрҙә булһа ла, еңеүселәр сафында атланы. Һәр кем үҙенең ғаилә геройын иҫкә алырға мөмкинлек булғанда, ысынлап та, бер кем дә, бер нәмә лә онотолмаясаҡ...

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Быйыл беренсе кварталда Башҡортостанда 9,29 миллиард һумлыҡ 6563 ипотека торлаҡ кредиты бирелгән. Уҙған йылдың ғинуар-март айҙары менән сағыштырғанда, ипотека займдары һаны, күләме 71,8 һәм 76,7 процентҡа артҡан. Был хаҡта Башҡортостан Милли банкында белдерәләр. Ипотека кредитының уртаса ставкаһы йылына - 12,8 процент, кредитлау срогы яҡынса 14,4 йыл тәшкил иткән. Былтыр ғинуар-март айҙарында иһә 15 процент һәм 14 йыл самаһы.

✓2016 йылдың беренсе кварталында Башҡортостанда халыҡтың үлем кимәле һигеҙ процентҡа кәмегән. Ағымдағы йылдың өс айында төбәктә бөтәһе 13 158 кеше вафат булған, былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда был 990-ға кәмерәк. 13 610 сабый тыуған, был 2015 йылдың тәүге кварталына ҡарағанда 437 балаға аҙ. Тәбиғи үҫеш 452 кеше тәшкил иткән. Төбәктә сабыйҙар араһында үлем 20 процентҡа кәмегән, был иһә Рәсәй күрһәткесенән һигеҙ процентҡа кәмерәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

✓Башҡортостанда Мордовия Республикаһы һәм Волгоград өлкәһенең халыҡты социаль яҡлау системаһы вәкилдәре халыҡты социаль хеҙмәтләндереү өлкәһендәге хеҙмәттәрҙе дәүләткә ҡарамаған секторға күсереү буйынса төбәк тәжрибәһен өйрәнәсәк. Уны Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич юғары баһаланы һәм бөтә илдә таратырға тәҡдим итте.

✓2016 йылда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың указы менән республикала танылған композитор, СССР-ҙың халыҡ артисы, Глинка исемендәге РСФСР-ҙың дәүләт премияһы лауреаты Заһир Исмәғилевтың 100 йыллығы билдәләнә. 7 ноябрҙән 16-на тиклем Өфөлә башҡарыусы музыканттарҙың Заһир Исмәғилев исемендәге III халыҡ-ара конкурсы уҙғарыла. Музыкаль бәйге Өфө дәүләт сәнғәт институтында ойошторола. Конкурс күренекле башҡорт композиторының тыуыуына 100 йыл тулыуға арнала. Ҡатнашыу ғаризаларҙы 2016 йылдың 19 сентябренә тиклем ismagilovkonkurs@ mail.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк.

✓"Яндекс" компанияһы аналитиктары Рәсәй төбәктәрендә интернетты файҙаланыу буйынса мәғлүмәт баҫтырып сығарҙы. Асыҡланыуынса, Өфө тарифтары - иң арзаны. Башҡортостандың баш ҡалаһында лимитһыҙ интернеттың уртаса хаҡы - 325, Рәсәй буйынса уртаса 400 һум.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# БАШҠОРТОСТАНДЫ...

## ҡабаттан астым!



**Беренсе тапҡыр Өфөлә былтыр апрелдә башҡорт википедист-коллегаларым "Вики-Һабантуй-2015" сараһын үткәргәндә булғайным. Конференцияның төп эшенән бушаған арала баш ҡала менән дә таныштыҡ. Сараны ойоштороусылар беҙҙе Шишмә районына алып барып, боронғо ҡомартҡылар - Хөсәйенбәк һәм Турахан кәшәнәләре, шулай уҡ яңы ғына төҙөлгән мәсет һәм православие ҡорамы менән таныштырҙы.**

Күп йылдар дауамында Рәсәй Федерацияһының Европа өлөшөндәге төбәктәре, шулай уҡ башҡа илдәрҙең бик күп урындары менән танышһам да, Башҡортостан минең өсөн ысын асыш булды. Шуға күрә быйыл Башҡортостанда Вики-семинар үткәреләсәге, уның Урал тауы һырттарының беренеһендә буласағы тураһында мәсьәлә күтәрелгәс, был сара мотлаҡ үтһен һәм унда үҙемдең мотлаҡ ҡатнашыуым өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләргә кәрәк, тигән ныҡлы ҡарарға килдем.

Вики-Һабантуйҙан ҡайтҡас, башҡорт теле менән таныша, башҡорт Википедияһына төрлө төҙәтеүҙәремде эшләй, Википедияның украин бүлегендә Башҡортостан тураһында мәҡәләләр яҙа, шулай уҡ башҡорт Википедияһына Украина тураһында башҡортса мәҡәләләр ебәрә башланым. Ошо ваҡыт эсендә башҡорт бүлегенең мөхәррирҙәре менән таныштым, улар миңә башҡортса мәҡәләләр яҙыуҙа ярҙам итте, һөҙөмтәлә былтыр уҙғарылған "Башҡортостан журналистары - башҡорт Википедияһы авангардына!" вики-марафонында еңеүселәр рәтен тулыландырҙым. Күмәкләп ярҙам иткәндәре өсөн улар миңә шаяртып, "полк улы" тигән ҡушамат тағып ҡуйҙы. Башҡортостанға беренсе сәфәремдән һуң ошо һоҡланғыс төбәк тураһында ватандаштарымдың ҡыҙыҡһынып белеүен теләнем, шуға күрә, башҡорт коллегаларым ярҙамында, украин бүлегендә Башҡортостан тематик аҙнаһын ойошторҙом. Унда ҡатнашыусылар башҡорт коллегаларыбыҙҙан иҫтәлекле бүләктәр алды, ҡайһы берҙәре әле лә Башҡортостан тураһында мәҡәләләр яҙыуын дауам итә.

Шул уҡ йылдың көҙөндә башҡорт Википедияһы хакимы Зөфәр Сәлихов менән Эстонияла, Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре вәкилдәренең осрашыуында булдым. Уның менән алдан уҡ һөйләшеп, Эстонияла тағы бер көнгә тотҡарланырға һәм башҡорт халҡы өсөн мөһим әһәмиәткә эйә Палдиски ҡалаһына барырға килешкәйнек. Был сәфәр ҙә юҡҡа түгел ине - башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев менән икенсегә танышыуым булды был урын. Шуға ла батыр тыуған Салауат районында үтәсәк вики-семинарҙан бер нисек тә тороп ҡала алмай инем: беренсенән, уның тыуған яҡтарын күргем килһә, икенсенән, дуҫтарыма әйләнгән башҡорт коллегаларым менән күҙгә-күҙ ҡарап аралашыу, әлегә тиклем Википедия буйынса виртуаль аралашҡан башҡалар менән танышыу теләгем көслө ине.

Шуныһына әле лә аптырайым: Вики-Һабантуйҙан ҡайтҡас, интернетта Ҡорғаҙаҡ фотоһын күреп, ошо тәбиғәт һәйкәле тураһында украин википедияһына мәҡәлә яҙҙым һәм уны барып, үҙ күҙҙәрем менән күрергә теләнем. Әммә хыялым шул тиклем тиҙ тормошҡа ашыр тип һис уйламаным. Ә семинар тап Янғантау шифаханаһы базаһында үтте һәм беҙ тап Ҡорғаҙаҡ эргәһендәге ҡунаҡханала йәшәнек. Мәлдән файҙаланып, көндәр һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, мин унда һыу инеп тә сыҡтым.

Семинарҙы ойоштороусылар хаҡында бер-ике һүҙ әйтмәһәм, яҙыҡ булыр. Улар сара идеаль үтһен өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләгән. Эш барышы тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, шафахана комплексы хакимиәте һәм хеҙмәткәрҙәре, шулай уҡ башҡорт Википедияһы вәкилдәренең тырышлығы арҡаһында файҙалы эш матур саралар менән үрелеп барҙы. Беҙ шифахана комплексындағы крайҙы өйрәнеү, шулай уҡ Малаяҙ ауылындағы - Салауат Юлаев, Арҡауыл ауылындағы - Рәми Ғарипов, Харис Йосопов, тыуған яҡты өйрәнеү музейҙарында булдыҡ, Янғантау шифаханаһы коллективтарының концерттарын кинәнеп ҡараныҡ. Тәүҙә семинар үткәреү өсөн бер аҙна бик оҙаҡ һымаҡ тойолғайны, һуңынан, киреһенсә, ул бик ҡыҫҡа булды.

Әлеге ваҡытта Википедияның Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре тел бүлектәрендә Вики-яҙ проекты бара. Уның һөҙөмтәһендә Башҡортостан тураһында сит телдәрҙә мәҡәләләрҙең артыуы мине бик ҡыуандыра. Сөнки улар ҙа, мин кеүек бер йыл элек ошо һоҡланғыс төбәккә ғашиҡ булған кеүек, Башҡортостанды үҙҙәре өсөн асасаҡ. Ә Башҡортостанда ойошторолған Вики-саралар кимәле яҡын киләсәктә бында мотлаҡ халыҡ-ара Вики-осрашыуҙар үткәрергә кәрәклеген раҫланы.

**Виктор СЕМЕНЮК,**
**Википедияның украин бүлеге хакимы.**

ҠЫҪҠАСА



# СКРИПКАСЫЛАР ЯРЫША,

## майҙансыҡтар төҙөлә...

✓ Республика милкендәге шифаханаларҙы хосусилаштырыу күҙ уңында тотолмай, тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов. Һауыҡтырыу учреждениелары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген күтәреү маҡсатында идара итеү формаһын алыштырыу күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Мәҫәлән, "Янғантау" шифаханаһында ял итеүселәрҙең 15-20 проценты ғына Башҡортостан халҡы. Ҡалғандары - Силәбе, Свердловск, Төмән өлкәләрендә, Татарстанда һәм башҡа субъекттарҙа йәшәүселәр. Рөстәм Зәки улы "Бер кем дә шифаханаларҙы шәхси ҡулдарға бирергә йыйынмай, һүҙ юлламаларҙың хаҡын арзанайтыу, шул уҡ ваҡытта ситтән килеүселәр менән ғәҙел эшләү өсөн акционерҙар йәмғиәте булдырыу аша ресурстар йәлеп итеү тураһында бара", - тип билдәләне.

✓ Өфөлә "1000 велосипеды көнө" фестивалендә 10 мең самаһы кеше ҡатнаша. Илдәге ҙур веломарафон 22 майҙа үтә. Республиканың баш ҡалаһында ул алтынсы тапҡыр уҙғарыла. Ойоштороусылар билдәләүенсә, фестивалдә теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Ҡатнашыусылар көндөҙгө сәғәт 12-лә Ленин исемендәге майҙандан старт ала, сәғәт 11-ҙән теркәү үтергә мөмкин. Велоуҙыш Ленин исемендәге майҙан - Октябрь проспекты - Октябрҙең 50 йыллығы урамы - Революция урамы - Ленин урамы - Пушкин урамы - Театр урамы - Зәки Вәлиди урамы - Конгресс-холл маршруты буйынса уҙа.

✓ Өфөлә Владимир Спиваковтың I Халыҡ-ара скрипкасылар конкурсы асылды. Музыка ярышына төрлө илдәрҙән 12 йәш ҡатнашыусы килде. Жюри беренсе турға йомғаҡ яһаны ла инде. 12 йәш музыканттың һигеҙе ярымфиналда ҡатнашыусылар иҫәбенә инде. Башҡортостандан берҙән-бер вәкил - 18 йәшлек Анастасия Мамяшева бәйгенән төшөп ҡалды. Әммә өфөләр, республика халҡы Настя өсөн тауыш бирә ала. 11 майҙан 15-нә тиклем конкурстың сайтында Тамашасылар һөйөүе призына тауыш биреү ойошторола. Владимир Спиваковтың I Халыҡ-ара скрипкасылар конкурсы ғәҙәти булмаған приз фонды менән үҙенсәлекле. Улар - танылған осталар яһаған дүрт скрипка.

✓ Өфө хакимиәте ҡала ихаталары өсөн дөйөм хаҡы 14 миллион 700 мең һум булған 56 балалар майҙансығы алыуҙы планлаштыра. 35 уйын комплекты Киров, Ленин, Дим, Совет, Октябрь районлары һәм Һупайлы биҫтәһен тәьмин итһә, 21 майҙансыҡ Орджоникидзе һәм Калинин райондарына урынлаштырыласаҡ. Балалар уйын комплексына өс башня, шыуыу тауҙары, баҫҡыс, спираль формаһындағы бағана, дуғаға оҡшаш күпер һ.б. инә. Уйын комплектарынан тыш, бәүелсәктәр, ҡом майҙансыҡтары, карусельдәр алынасаҡ. Аукцион 6 июнгә тәғәйенләнгән. Тауар менән тәьмин итеү ваҡыты 30 сентябргә тиклем.

✓ Йылдың тәүге кварталында ғына республика халҡы 17,3 миллиард һумлыҡ займ алған. Барлығы республикала яҡынса 187 446 кредит бирелгән, уның уртаса күләме 69 мең һум. Автокредитлауға килгәндә, ғинуарҙан апрелгә тиклем Башҡортостан халҡы уртаса 530 мең һумлыҡ ике мең самаһы займ алған. Шулай уҡ республикала бик йыш кредит карталары ҡулланалар. Йыл башынан улар менән 60 мең самаһы кеше файҙаланған. Карта буйынса бирелгән кредиттың уртаса күләме - 30 мең һум. Әммә ипотека буйынса Башҡортостан ТОП-10 исемлегенә инмәгән.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡайын һыуы

❖ Яҙ етте, ҡайын һыуын бөйөр дауалау өсөн эсегеҙ.

### Кукуруз

❖ Беҙ кукуруз сәкәне ашап үҫтек. Ул үт ҡыуығы, бауыр, бөйөр сирҙәрен дауалай. Эмаль һауытҡа бер ҡалаҡ ваҡланған кукуруз орлоғона бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнап торған һыу боҫонда 15 минут самаһы торғыҙ, 45 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Был төнәтмә үтте шыйыҡайта, бөйөрҙә ләмде сығыуын яҡшырта, бөйөрҙәге ташты иретә.

❖ Шулай уҡ кукуруз орлоҡтарын киптереп, май һәм он һаһан, бик тәмле ҡоймаҡ бешереп була.

### Алыҫтан күрмәһәң...

❖ Күҙҙәреңдә йомоп, бер нисә минут сәскә атҡан муйыл ботағы янында тор, шифаһы тейер. Әммә муйылдың ботағын һындырырға ярамай, кире йоғонто яһауы мөмкин.

### Һуған орлоғо

❖ Һуған орлоғон төйөп, тоҙ менән ҡатнаштырып, сөйәлгә бәйләргә, сөйәл төшөп бөтә. Ә һуған һутын тауыҡ майы менән ҡушып аяҡ кейеме өйкәгән ергә һөртһәң, килешә.

### Бетсә

❖ Яҙ, йәй бетсәләр ҙә "уяна". 1 балағалаҡ аш содаһын ярты стакан һыуҙа болгап, бетсәле биткә һөртөргә.

❖ 100 грамм юл япрағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут ҡайнатырға. Шуның менән көн һайын кисен битлек яһарға.

❖ 100 грамм бөтнөктө 1 литр ҡайнар һыуҙа төнәтеп, көн һайын биткә һөртөргә. Был дауаларҙы оҙайлы ваҡыт эшләгеҙ, 2-3 көн ҡулланыу бер нигәҙә файҙа бирмәй.

### Е витамины

❖ Был витамин үҫемлек майында, сәтләүектә күп, уны дауамлы ҡулланыу ир-аттар беҙендә була торған яман шеш сиренән һаҡлай. Көн һайын 50 мг витамин ашау ғүмерҙе лә оҙайта.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Үҙеңде ҡараһаң, олоғайыуҙан оялырға ла, ҡурҡырға ла кәрәкмәй. Ундайҙарға билдәле актриса Ольга Аросеваның һүҙҙәре менән: "Ҡартаябыҙ тип үкенмәгеҙ. Күптәргә был бәхет эләкмәй", - тип әйтке килә.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

# ЙЫУАҒА БАРЫУ

Яҙ көнө, тау битендә ҡар асылыу менән, малайҙар йыуаға йөрөй башлай.

Беләү таяҡты һелтәйһең дә, шулай һамаҡлайһың:

*- Йыуа, йыуа, йыуа тап,*
*Йыуа тап та ялтырап ят.*

Йыуаны тамыры менән ҡаҙып алыр өсөн беләү алып баралар. Йыуалыҡҡа еткәс:

*- Беләүем, беләүем, йыуа тап,*
*Йыуа тап та ялтырап ят! -*

тип ырғыта инек. Барһаң, шунда йыуа була торғайны.

# ЯҢЫ РИЗЫҠ АУЫҘ ИТКӘНДӘ

*Бисмилләһир-рәхмәнир-рәхим,*
*Иҫке ауыҙға - яңы аш,*
*Бирһен Хоҙай йөҙ йәш,*
*(Яңынан бер йөҙ йәш).*
*Иҫке ҡорһаҡ - яңы аш,*
*Яман ауырыу, минән ҡас!*

Яңы балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ, емеш-еләк ашар алдынан:

*- Иҫке ауыҙға - яңы аш,*
*Яңынан бир йөҙ йәш!* - тип әйтергә.

# ЭШ БАШЛАҒАНДА

Эш башлаған саҡта (киндер йолҡҡанда, киндер талҡығында, киндер һуғырға ултырғанда, тула баҫыр алдынан һ.б.) шулай тип һамаҡлайҙар:

*Ике кеше (йәки ике һуҡыр) күрмәһен,*
*Икендегә етмәһен.*
*Кеше-ҡара күргәнсе,*
*Ҡара көсөк өргәнсе,*
*Тиҙерәк кенә бөтәйем!*
*Эш башланым - башҡары,*
*Дошман һүҙе - тышҡары.*
*Осоп барған ҡош күрҙем,*
*Тик ятҡан бер таш күрҙем.*
*Күргәндәр күреп ҡалһын,*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә, Фатималар ҡулы.*
*Тфү, тфү, тфү!*

Был һамаҡты күберәк шәл бәйләгәндә әйтәләр. Сөнки шәл бәйләгәндә таш кеүек ҡатып тик ултырыу кәрәк. Ҡулдар ғына тик торорға тейеш түгел.

Эш башында кем килһә, шуға ҡарап эш барышын юрайҙар. Берәйһе килһә: "Шәп итеп килденме?" - тип һорайҙар. Шәп килһә, эш ырай. Ялҡау кеше килһә:

- Ялҡау килде, эшем ырамаҫ инде, - тиҙәр.

Тилбер кеше килһә:

- Эшем сыҙамаҫ, ыңғай барыр, - тиҙәр.

Ә килеүсенең үҙенә:

- Аяғың енел булһын! - тиҙәр. Килеүсе үҙе:

- Эшең ырамлы булһын! - ти. Шул һүҙҙән һуң былай тип тә өҫтәйҙәр:

- Эшкингән кеше булһаң, уңыр, эшкинмәһәң, туңыр!

*Икендегә етмәһен,*
*Ике һуҡыр күрмәһен,*
*Күрһә, күрһен күҙлеһе,*
*Ул да булһын йүнлеһе!*

Икмәк баҫыр саҡта:

*- Ҡулдың ҡеүәтен бирһен,*
*Киң ризыҡҡа яҙһын,*
*Иҫән-һау ашарға яҙһын!* - тиҙәр.

Май тасҡағанда:

*- Уң ҡулдан, һул ҡулдан,*
*Ҡотло ҡулдан!* - тип тотонаһын.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

*ӘЙТҺӘҢ - һҮҘ*

# ҒҮМЕР - БӨТӘҺЕНӘ ЛӘ,

## ә ҡартлыҡ һирәктәргә бирелә...

**Минең йылғылар быйыл алтын юбилейҙарын билдәләй. Илле йәшкә кешеләр айырым бер мәғәнә һала бит: хатта тыуған көнөн байрам итеүгә битараф булғандар ҙа был датаны, нисектер, иҫтәлекле итеп билдәләргә тырыша, эстән генә дуҫ-иштәренән, яҡындарынан ҡотлау, йылы һүҙ көтә.**

Шуға күптән күрмәгән класташымдың телефон аша ҡотлауыма булған реакцияһы шаҡ ҡатырҙы. "Һин нимә, таптың ҡотлар сәбәп! Ҡартайыу менән тәбриклəйҙәрме ней? - тип, әллә ысын, әллә юрый үпкәләне ул. - 49 йәштә ҡотлауҙарҙы тыныс ҡабул иткәйнем әле. Ә быйыл - илле! Уф, уйлаһам да, илағым килеп китә! Ғүмер тауының башына менеп еттек тигән һүҙ бит, инде аҫҡа тәгәрәргә ҡалды. Ҡартайҙыҡ, класташ, ҡартайҙыҡ ..."

Ҡарап тороуға йәш сырайлы ханымдың ошолай фекер йөрөтөүе мине уйға һалды. Ысынлап та, йәшлек - ғүмер осоро түгел, ә күңел торошо, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ҡырҡ йәшендә лә үҙен әбей итеп тойған, йә, киреһенсә, етмештә лә йәштәрҙе көнләштерерлек энергияһы ташып торған ханымдар бар. Шәхсән үҙемә килгәндә, ҡайһы йәшкә етһәм, шуны яратам, һәр ғүмер осоро үҙенсә матур, һәр береһенең үҙ плюстары тигән фекерҙәмен. Шуға, кире ҡайтмаҫ мәлдәрҙе һағынып ултырғансы, бөгөнгө көнөң менән кинән.

Джонатан Свифт: "Аҡыллы кешеләр араһында яңынан йәшлегенә ҡайтырға теләгән берәү ҙә булмаған әле", - тип дөрөҫ әйткән, миненсә. Ысынлап та, йәш саҡта көслә, һау, матур, дәртле булаһың, әммә иҫәрлек тә етерлек, башта елдәр уйнау арҡаһында күпме үкенесле



хаталар яһайһың, һуңынан үкенестәр йөрәкте тырнай. Ә олоғайғас, аҡыл ултыра, тәжрибә туплана, уның ҡарауы, кәрең ҡайта, йөҙөң таушала, сәләмәтлегең ҡаҡшай. Французҙарҙың "Если б молодость знала, если б старость могла..." тигән әйтеме нәҡ шул турала. Әммә ошо йәшлек менән ҡартлыҡ араһындағы юлдың уртаһында тегеһенең дә, быныһының да иң яҡшы сифаттарын һаҡлаған, көс-дәрт, матурлыҡ менән тәжрибә, аҡыл йәнәш атлаған бер ғүмер осоро бар. Илле йәш, алтын юбилей - ана шул урталыҡ тип уйлайым. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, ысын тормош илле йәштә башлана ғына... Яңы һөнәр, шөғөл үҙләштерергә лә, яңы эш асырға ла, китап яҙырға, сәйәхәттәргә йөрөргә бер ҙә һуң түгел.

Ҡайһы берәүҙәрҙең йәшлекте һағынып, ҡартайыуҙарына зарланыуҙары үҙенә күрә ауырыу төҫөн ала. Бер ваҡыт минә алтмыш биш йәштәрҙәге бер апай шиғырҙарын үҙнәшер менән китап итеп сығарыуҙа ярҙам һорағайны. Өҫ тиҫтәнән ашыу шиғри әҫәре техник яҡтан камил, художестволыҡ йәһәтенән уңышлы булһа ла, тематикаһы буйынса бер-береһенә игеҙәк кеүек оҡшаш - барыһында ла авторҙың йәшлеген, матур, шәп саҡтарын һағыныуы, мыжыҡ, сирле, ҡартлығы менән зарланыуы ярылып ята. Китапҡа рәсемен ҡуйырға тәҡдим иткәс, "Йәш саҡтағы фотоларым юҡ бит әле" тине. Ә бөгөнгә сырышлы йөҙөн китапҡа ҡуйыу хаҡында һүҙ булыуы ла мөмкин түгел ине.

Әйткәндәй, хәбәрсе булып эшләгән саҡта ла мин ошоға оҡшаш хәлдәргә менән йыш тап була торғайным. Берәй ҡатын-ҡыҙ хаҡында яҙырға барһаң, әңгәмә ыңғай ғына бара ла, геройың фотоға төшөүҙән ҡырҡа баш тартып, йәш саҡтағы альбомдарын аҡтара башлай. 50-60 йәшлек кеше тураһындағы һүрәтләмә эргәһенә 30 йыл элекке һүрәтте ҡуйыу көлкө лә һуң. Ундайҙар хаҡында төпсөр уҡыусыла "тимәк, бөгөн ҡарт, йәмһеҙ, һимергән инде" тигән фекер мотлаҡ тыуасаҡ. Бер танышым гәзит-журналдарҙа сыҡҡан шиғри шәлкеме янына гелән егерме йәшендә төшкән фотоһын ҡуя, ә үҙе күптән пенсияла...

Үҙен тәрбиәләгән, матур кейенгән, биҙәнгән ҡатындарҙың күбеһе йәш саҡтағы ваҡытынан да ҡыҙыҡлыраҡ, сағыуыраҡ, зауыҡлыраҡ күренеүсән. Үҙеңде ҡараһаң, олоғайыуҙан оялырға ла, ҡурҡырға ла кәрәкмәй. Ундайҙарға билдәле актриса Ольга Аросеваның һүҙҙәре менән: "Ҡартаябыҙ тип үкенмәгеҙ. Күптәргә был бәхет эләкмәй", - тип әйтке килә. Ысынлап та, күпме кеше ниндәйҙер фажиғәме, бәхетһеҙлек осрағымы, ауырыуымы арҡаһында тормош менән йәшләй генә хушлаша. Улар ниндәй хәлдә лә был донъяла ҡалырға теләр ине. Ғүмер - бөтәһенә лә, ә ҡартлыҡ һирәктәргә генә бирелә...

**Рәхимә МУСИНА.**

*ҠУШАМАТ*

# БЕҘ - "ҠАЙЫШТАР"

**"Киске Өфө"нөң "Ҡушамат" тигән яңы рубрикаһында Айгөл Айытколованың яҙғандарын уҡып, үҙ ауылымдағы ҡушаматтарҙы - ә улар 40-тан ашыу икән - барлап, рәхәтләнеп көлөп, кинәнес тә, һағыш та кисерҙем, төрлө хәлдәрҙе иҫләнем.**

Ҡушамат - кешенең ҡылығына, һөйләшеүенә, кейеменә, эшенә, ҡыйыулығына, йүнһеҙлегенә, үҙен тота белеүенә, ниндәйҙер ҡылығына ҡарап бирелгән билдә, баһа бит ул. Тотош ғаиләгә, нәҫелгә, айырым кешегә лә ҡушамат "йәбешә".

Беҙ, Монасиповтар нәҫеле, "ҡайыш" ҡушаматлы. Бынан 1-2 быуат элек үк беҙҙең бер олатай менән Ғәйнетдиновтарҙың олатаһы Теләүембәт ягынан ҡайтып килгәндә, матур ғына ҡайыш муйынсалы һары көсөк эйәргән, ҡыуһалар ҙа ҡалмаған. Ахырҙа, йәлләп, көсөктө алмашлап күтәреп алып ҡайтҡандар. Ауылға еткәс, беҙҙең олатай - ҡайышын, теге олатай көсөктө алған. Ун көн тирәһе үтеүгә, ауылға 60 йәштәр тирәһендәге бабай көсөгөн эҙләп килгән. Малайҙар уны көсөклө йортҡа килтергән. Көсөк, хужаһын танып, уға һырпаланған. Көсөгөн дә, ҡайышты ла алғас, бабай: "Бөгөндән ҡайышты алғандың нәҫеле - ҡайыш, көсөктө алғандыҡы - һары көсөк булыр", - тигән. Халыҡ теле - ел тирмән, ике ҡушамат та һаман йәшәй, һис кем үпкәләмәй, берәүҙән дә иҫе китмәй.

Әсәйемдең тоҡомо "бүре" ҡушаматлы. Элек, ауыҙ күтәреп, ауылға ишеттереп йырлау гәйеп һаналған. Олатайым Шәйхетдин, ҡайҙан ҡайтһа ла, ҡыш санаһына, йәй арбаһына һуҙылып ятып, атын үҙ яйына ҡуйып, йырлар булған. Хәҙрәт асыуланып: "Һай, был Шәйхетдин, оялмай, бүре кеүек олой бит", - тигән көндән үҙенә лә, ғаиләһенә лә, хатта беҙгә лә "бүре" ҡушаматы йәбеште. Берәү ҙә үпкәләмәй ҙә, үсекмәй ҙә, әйтерһең дә шулай кәрәк.

Ә бына башҡорт Усман бабайҙы һәр саҡ тура һүҙле, сүкеш менән ҡаты һуҡҡан кеүек бер генә һүҙ әйткәне өсөн Сүкеш Усман тиҙәр ине. Беҙ Сүкеш бабай тип йөрөттөк, асыуланманы. Үҙе уңған булды, тәнгә сихәтле, тип, ер аҫты мунсаһы эшләне, беҙ шунда йыуынырға йөрөнөк.

Ауылда Ҡайыш Шәрәф бабайымдан башҡа йылына бер тапҡыр айыу алып, итен халыҡҡа тараҡкан Айыу Шәрәф ағай ҙа булды. Айыуҙы ҡарарға бөтөн ауыл йыйыла ине. Бик йомарт булды.

Бөтә колхоз малын, кешеләрҙең мал-тыуарын дауалаған Әхмәди бабайҙы Мичурин тип йөрөттөләр. Ботаника китабында мәшһүр баҡса оҫтаһы Мичуриндың эшләпәле, матур кейенгән һүрәтенә оҡшатҡандарҙыр инде. Бабай ҙа эшләпә кейеп, ыҡсым ғына ҡиәфәтле ине. Колхоздың ҡорсаңғы аттарын дауалағанда үҙе лә ағыуланып, сирләп үлде.

Өләсәйемә ике өй аша ғына Ғәйнизәр инәй йәшәне.



Йыл буйы һағыҙ ҡайнатыр ине, шуға уны Һағыҙ инәй тинеләр, бик изгелекле ине. Бөтә эштәрҙә лә әүҙем, кешеләрҙе дәртләндереп эшләтә белеүсе, аңлы ҡарашлы Тәхфәтулла бабайға Комсомол бабай ҡушаматы эләкте. Ысынлап та, өлкән булһа ла, бөтөн ерҙә алда барҙы ул.

Сәрүәретдин олатай иҫкә төшһә, көлкө килә. Ул үҙе мәрәкәсе, төрлө ролдәргә инә белә ине. Шул ҡылығы менән кеше ҡайғыһын тарата, шатлығын үртәклаша белгәне өсөн уны Әртис бабай тип йөрөттөләр.

Был телгә алынған ауылдаштарымдың барыһы ла изге күңелле, эшһөйәр, бөтөн ауырлыҡты ла, шатлыҡты ла ауылдаштар менән бергә күтәреүсе, ярҙамсыл кешеләр ине. Улар күптәр, һәр береһен Хоҙай ярлыҡаһын, урындары йәннәттә булһын.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

✓ *Әбей үҙе һөйләгәнсә, ул ире Ибраһим Мортазин менән яу ҡырҙарында пар аттарҙа елдереп кенә йөрөгән. Хатта Муса Мортазин отрядында ире менән әҙме-күпме яу юлдарын да үткән.*



ХӘТЕРКИТАП

**Ошо көндәрҙә Учалы районы ағинәйҙәре Көсөк ауылында легендар батырыбыҙ Муса Мортазинға арналған Хәтер кисәһе уҙғарҙы. Был ауылда батырыбыҙҙың музейы ойошторолған. Унда Муса Мортазиндың ҡустыһы Ибраһим хаҡында ла байтаҡ материалдар урын алғанын күреп, ошо шәхес хаҡында үҙем белгәндәрҙе һөйләмәксе булдым.**

# ҠЫЙРАТЫЛҒАН ЯҘМЫШТАР



Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы Польша фронтында. 1920 й.

1972 йылдың көҙөндә Сораман ауылы мәктәбендә эш башлаған ғына осор ине. Ғәлиә тигән апайҙың өйөндә фатирҙа йәшәйем. Бер мәл ул мине үҙҙәренән юл аша ғына йәшәгән Вәсбиямал әбей менән Сабирйән бабайҙарға ебәрҙе. "Һин дә, улар ҙа боронғо тарих менән ҡыҙыҡһынырға яратаһығыҙ. Бер юлы яҡындан танышып ҡайтырһың, уғата килешеп китерһегеҙ", - тип өҫтәп тә ҡуйҙы.

Ысынлап та, ололарҙың күҙгә элерлек, телгә алырлыҡ тарихтары бихисап ине. Бигерәк тә әбейҙең теленә һандуғас ҡунғанмы ни! Ул тәүҙә йәшлек йылдары мажараларын иҫкә алды. Шунан һуң элекке ире - Көсөк ауылы егете Ибраһим тураһында һөйләп алып китте. Йәш йөрәктәр Хәмдиә еңгәләре ярҙамында йәшерен осрашып күрешкәс, бер-береһенә ғашиҡ булалар, киләсәктә тормоштарын бергә бәйләргә һүҙ ҡуйышалар. Әммә бер мәлде буласаҡ кейәү ҡолағына яман һүҙ еткерәләр: имеш, буласаҡ кәләшенең ҡул бармаҡтары зәғиф икән. Ямандың аяғы ергә тейһә генә тигеҙ, ә хәбәре һигеҙ, ти. Сос ҡолаҡ Хәмдиә еңгәләре был турала ишетеп ҡалыу менән шунда уҡ кейәү егетте саҡыртып ала. Аңҡы-тиңке килгән егетте тәҙрә төбөнә баҫтыра ла һыуҙан ҡайтыусыны күҙәтергә ҡуша. Бер аҙҙан инбашына көйәнтә һалған ҡыҙ күренә. Үҙе, еңгәһе өйрәткәнсә, егет күрерлек итеп, ике ҡулының да бармаҡтарын көйәнтәһе өҫтөнә йәйеп һалған... Оҙаҡламай йәштәр ҡауыша. Өфө Үҙәк архивында уларҙың никахлашыу тураһындағы ҡағыҙы ла һаҡланған...

Йылдар үтте. Мин дә Сораман ауылында ныҡлап тамыр йәйҙем. Шәжәрәләр менән ҡыҙыҡһынғас, төрлө архив ҡағыҙҙарын аҡтарырға тура килә. Шунда "Никах тураһында" тигән ҡыҙыҡлы документ таптым. Уны имам-хатиб Сәғитулла Хәбибулла улы яҙған булған. 1917 йыл. Вәсбиямал Ғабдулла ҡыҙы. 17 йәштә. Көсөк ауылынан 21 йәшлек Мортазин Ибраһим Ғаззал улына йәрәшелә. Шаһиттар: ҡыҙҙың ағаһы Нотфулла Ғабдулла улы. Әлтәфетдин Ишморат улы. Хөббихужә Мәғәсүм улы. Көсөк ауылында урынлашҡан Муса Мортазин музейына барғанда әлеге исемдәр теҙмәһен табып, яҙмаһын дөрөҫлөгөнә инандым.

Әбей үҙе һөйләгәнсә, ул ире Ибраһим Мортазин менән яу ҡырҙарында пар аттарҙа елдереп кенә йөрөгән. Хатта Муса Мортазин отрядында ире менән әҙме-күпме яу юлдарын да үткән. Ләкин йәштәрҙең артабанғы яҙмышы ҡыйралыштар осоронa тура килә. Утлы-дауыллы йылдар уларҙы бер-береһенән мәңгелеккә айыра. Сираттағы яуға улар йәнә ирле-ҡатынлы бергә ҡуҙғалалар. Тик Әбйәлил районының Ҡыҙыл йылғаһына еткәс, яугирҙәр - Муса һәм Ибраһим Мортазиндар 15 һыбайлы ярҙамында ҡатындарын тыуған яҡтарына кире оҙата. Ирҙәре, башҡа һыбайлылар менән бергә, юлдарын дауам итә.

Күп тә үтмәй, Вәсбиямалдың ҡыҙы тыуа. Уға Фәриҙә тип исем аҙанлаталар. Муса Мортазин авторлығындағы "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре" китабында яҙылғанса, 28-се полктың командиры Ибраһим Мортазин Польша фронтында барған яуҙа башын һала. Эш былай була: һуғыштарҙың береһендә Ибраһим Мортазин полкына ныҡ ығынған урынын ҡалдырырға тура килә. Етмәһә, уның бер һыбайлыһы пулемётты алып китергә өлгөрмәй ҡала. Асыуынан ярһыған Муса Мортазин кисекмәҫтән пулемётты алып килергә бойороҡ бирә һәм һалдаты урынына Ибраһимдың үҙен ебәрә. Яугир тиңһеҙ ҡан ҡойоштa аҡтар тарафынан сәнскеләп үлтерелә. Ҡустыһының йәнһеҙ кәүҙәһен Муса ут эсенән алып сығыуға өлгәшә. Һәм уны Украина тупрағында ерләйҙәр.

Вәсбиямал әбей һөйләүенсә, иренең башҡынайы алыҫ Украинала, Киевта ятып ҡалған. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ауылдашы Шәрәфетдинов Фәйзрахман, Ибраһимдың ҡәбер ташын үҙ күҙҙәре менән күреп, унда яҙылған исем-шәрифтәрҙе уҡый. Һәм һуғыштан әйләнеп ҡайтҡас, был турала Вәсбиямал әбейгә һөйләп бирә.

Ә хәҙер уларҙың ҡыҙҙары тураһында бер нисә һүҙ. Ҡанлы-даулы йылдарҙа яралыуҙың һөҙөмтәһе булғанмылыр, Ибраһим менән Вәсбиямалдың ҡыҙҙары Фәриҙәнең дә ғүмергенәһе аяныслы тамамлана. Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан уҡытыусы ҡыҙ алыҫ Украинала эшләмәт иткән иренән саҡырыу ала. Йәш ҡатын барып етеүгә генә Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Ире ашыҡ-бошоҡ хушлашып, кәләшен поезға ултыртып өлгөрә-өлгөрмәүен. Әммә Фәриҙәгә тыуған яғына әйләнеп ҡайтырға яҙмай. Ҡайғыға ҡалған әсә, күпме генә күҙ йәшен түкһә лә, ҡыҙын көтөп ала алмай. Һуңынан тейешле органдарға хат-хәбәр ебәреп, балаҡайын эҙләтә. Әсә кеше: "Һеҙҙең ҡыҙығыҙ ултырған поезд немецтар тарафынан бомбаға тотолған, ул шунда һәләк булған", - тигән яуап ҡына ала.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы**
**Сораман ауылы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Көндөң болотло булыуы беҙҙе тирә-яҡты ләззәтләнеп ҡарау-күҙәтеүҙән мәхрүм итте. Мин элек барса Урал сығанаҡтарының бейек урындарҙан һәм һаҙлыҡлы тауҙарҙан башланыуы хаҡында иҫкә алып киткәйнем инде; шуға күрә һыуҙың нисек итеп тау түбәләренә тиклем күтәрелеүе тураһында мотлаҡ әйтеп үтергә кәрәк.

Был турала ғилемле заттар төрлөсә уйлай: ҡайһылары һыуҙың ер аҫты каналдары буйлап сығанаҡтарға тиклем килеп етеүен, төрлө урындарҙа ерҙең өҫкө ҡатламын тишеп сығып, йылғаларға баш биреүен күҙ алдына килтерә. Бәғзе берәүҙәре шундай уҡ һыу юлдарын уйлап сығарып, тәүгеләренән айырмалы рәүештә, һыуҙың таулы ерҙәргә барып етеп, ер аҫты утынан быуға әйләнеүе, юғарыға күтәрелеүе һәм тау баштарындағы ҡая ярыҡтарында һәм ҡыуышлыҡтарында тамсы булып тупланып, бергә ҡушылыуҙан шишмә сығанағы барлыҡҡа килтереүе хаҡында һүҙ йөрөтә. Бындай ҡараштарҙы хуплау йәиһә кире ҡағыу минең эшем түгел: минән башҡа ла был турала тотош китаптар яҙылған, ә миңә һауа юлдары буйлап килеүсе дингеҙ быуҙарынан һыу сығанаҡтарының барлыҡҡа килеүе хаҡындағы ҡарашҡа инаныу өҫөн Ирәмәл тауының бик күп дәлилдәр биреүе тураһында ғына әйтәһе ҡала. Ошо ҡараш яҡлылар быуға әүерелгән дингеҙ һыуының бөтә Ер шары буйлап осоп йөрөп, таулы урындарға еткәс, һалҡын булғанлыҡтан түбән төшөүе һәм, бергә тупланып, йылға баштарын барлыҡҡа килтереүе хаҡында фекер йөрөтә. Ҡышын ябай ғына тәжрибә беҙгә быуҙың һалҡын урында ҡуйырырға һәм түбән төшөргә тейеш икәнен көн һайын күрһәтеп тора. Ҡаты һалҡындар ваҡытында яғылған бүлмәлә тәҙрәләрҙең тышҡы яҡтан түгел, ә эстән туңыуы хаҡында кемебеҙ ҙә белә; өй эсендәге һыу парҙары, тәҙрәләр янында һалҡын булғас, шунда йыйыла һәм, тәҙрәгә йәбешеп, һыуыҡта туңа. Тау баштарында тигеҙ ерҙәгенән һалҡыныраҡ икәне тураһында тауҙарҙа булған һәр кемгә билдәле; бейек тау һырттарында ятыусы ҡарҙар ошоға бынан да яҡшыраҡ ышандырта. Тәбиғәт тикшереүселәр тәү ҡарамаҡҡа ҡапма-ҡаршылыҡлы булып тойолған ошо күренеште ҡояш нурҙарының төрлө сифаты менән аңлата. Улар беҙ тигеҙ ерҙә ике төрлө, йәғни тура һәм ер өҫтөнән сағылған нурҙар йөғонтоһонда булабыҙ, ә һуңғылары тау башына барып етмәй икән, тип иҫбат итә.

Минеңсә, Ирәмәл тауы һыу сығанаҡтарының килеп сығышы хаҡындағы ошо ҡарашҡа бар яҡлап та тап килеп тора. Уның башы күбеһенсә һәр саҡта ҡуйы томан менән ҡапланған була; күсеп йөрөүсе башҡорттар ошо тау янында аҙ көндәрҙең һирәк булып, һәр саҡта йә ямғыр, йә йәй уртаһында ҡар яуыуы хаҡында бер тауыштан һөйләй. Ирәмәлдең һаҙлыҡлы түбәһе үҙе үк башҡорттар һөйләгәнде раҫлап тора. Уйлауымса, йылғаларҙың төрлөсә булыуын ошоға дәлил итеп килтерергә була. Иң билдәле йылғалар Яман Тауҙан һәм Ирәмәлдән ағып сыға: тау тәпәшерәк булған һайын унан һыу сығанағы ла аҙыраҡ була. Бөтәнләйгә шулай, тип раҫлау ҙа дөрөҫ булмаҫ ине: йыш ҡына тәпәш тауҙар һәм түбән урындарҙан да бигүк бәләкәй булмаған йылғалар ағып сыға...

**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1723 йыл** - Нуғай даруғаһының Бошмаҫ-Ҡыпсаҡ волосында Е.И. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышының билдәле етәкселәренең береһе башҡорт старшинаһы Кинйә Арыҫланов тыуған. 1774 йылдың Йайыҡ казактары Пугачевты батша ғәскәренә тотоп биргән 7 сентябрь төнөндә ғәйеп була.

➔ **1723 йыл** - Екатеринбург ҡалаһына нигеҙ һалына. Төҙөлөш ваҡытында башҡорттар менән ҡаҙаҡтарҙан һаҡланыу өсөн ҡалаға 25 мең урыҫ крәҫтиәне килтерелә.

➔ **1724 йыл** - Ҡаҙна иҫәбенә Полевской баҡыр иретеү заводы төҙөлә. Баҡыр ятҡылығы 1702 йылда уҡ асыла. 1710 йылда руда сығарыла башлай. Чусовой йылғаһының башҡорттар аша сығып йөрөй торған Ҡыя кисеүендә һарайҙар, келәттәр, башҡа хужалыҡ ҡаралтылары төҙөлә. 1718 йылдың йәй башында Сыбар Балағошов етәкселегендә башҡорттар ошондағы ҡоролмаларҙы, төҙөлөш өсөн әҙерләнгән бүрәнәләрҙе яндырып, урыҫтарҙы ҡыуып ебәрә. Ләкин дүрт йыл буйы ҡаршылыҡ күрһәткәндән һуң, 1721 йылдың 9-10 июнендә Сыбар батыр үҙ биләмәһендә завод төҙәлөү менән килешергә мәжбүр була һәм ошо турала указға һәм Сенат грамотаһына ҡул ҡуя.

➔ **1725 -1735 йылдар** - Өфөлә Г. Красильниковтың баҡыр иретеү заводы эшләгән осор.

➔ **1729 йыл** - Соҡсонда А. Демидовтың баҡыр иретеү заводы төҙөлә.

➔ **1730 йыл** - башҡорт халҡының данлы улы, Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында башҡорт ғәскәрҙәре башлығы булған милли герой Салауат батырҙың атаһы - Юлай Аҙналин тыуған.

➔ **1730 йыл** - Ф.И. Страленбергтың Стокгольмда (Швеция) баҫылып сыҡҡан "Европа менән Азияның төньяҡ һәм көнсығыш өлөштәре..." тигән китапта Урал тәбиғәте тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр килтерелә. Автор китабы өсөн материалдар туплау маҡсатында беҙҙең ерҙәр буйлап байтаҡ сәйәхәт ҡыла.

➔ **1733 - 1734 йылдар** - Уралда Икенсе Камчатка экспедицияһы эшләй.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

# БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ

## бирмәһәң дә ҡурҡыныс

**Мәктәптәрҙә Берҙәм дәүләт имтихандары башланырға тора. Шуға ла мәктәпте тамамлаусы балаларҙың да, уларҙың ата-әсәләренең дә үҙенсәлекле бер тулҡынланыуы, ҡурҡыу, борсолоу кисергән мәле. БДИ шул тиклем дәрәжәлә ҡурҡынысмы? Ундай һынауҙар мәлендә үҙеңде ышаныслы тотоу өсөн ни эшләргә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу маҡсатында бөгөн беҙ редакциябыҙға "Олимпия" репетиторлыҡ үҙәге белгестәрен - математика уҡытыусыһы Вадим НИҒМӘТУЛЛИНды, физика уҡытыусыһы Вәхит БАҒЫШАЕВты, Республика башҡорт лицей-интернатының химия уҡытыусыһы Айнур ҒҮМӘРОВты әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

**▸ Теүәл фәндәрҙә һәм гуманитар фәндәрҙә үҙ иткән кешеләр араһында ниндәй айырма бар? Баланың ошо фәндәрҙең береһен һайлауы уның һәләтенә бәйле, тип уйлайһығыҙмы?**

**Вадим:** Уҡыусы сағымда теүәл фәндәргә маһир балалар башҡаларҙан аҡыллыраҡ та, уңышлыраҡ та тип уйлай торғайным. Был ҡалыплашҡан фекерем университетҡа уҡырға ингәс, шунда уҡ үҙгәрҙе. Килограмм һәм метрҙы бер рәткә ҡуйып сағыштырып булмаған кеүек, әле беҙ ҡараған ике төркөмдө лә бергә ҡуйып булмай икән. Һәр төркөмдөң көслө һәм көсһөҙ яғы бар.

**Вәхит:** Джефф Колвин исемле Америка авторының "Иҫ китмәле һөҙөмтәләр. Һәләттең бер ҡыҫылышы ла юҡ" исемле китабы бар. Китапта автор, кешенең уңышы - эшен эш итеү өсөн көн дә тырышлыҡ һалыуына бәйле, ти. Вадимдың фекере лә ҡыҙыҡлы. Үҙемә гуманитар фәндәр менән теүәл фәндәрҙең икеһе лә берҙәй яҡын. Унынсы синыфҡа еткәнемсә ҡайһы юлды һайларға белмәй хитландым. Иллә мәгәр, бөтөн яҡлап камиллашыуға ынтылышым көслө булды. Минә ҡалһа, әгәр балаға ғаиләлә, баланғыс синыфтарҙа дөрөҫ тәрбиә бирелһә, ул тәрбиә ғүмерлек тиген һүҙ. Әгәр кешелә бала саҡтан белемгә ҡыҙыҡһыныу уятылмаһа, был хатаны төҙәтеүе ауырға төшә. "Мин ғүмер буйы математика уҡыным да бит, әммә әҙәбиәтте лә, телде лә, тарихты ла, географияны ла белеп еткермәйем", - тип зарланған йәштәрҙе күп осратҡаным бар. Бала саҡта күп нәмәнең кәрәклеген аңлап етмәйһең. Теүәл фәндәр ҙә, гуманитар фәндәр ҙә шәхесте төрлө яҡлап үҫтереү өсөн берҙәй файҙалы.

**Айнур:** Ҡабаланмай, төбөнә төшөп, "тәмләп" әҙәби китап уҡырға ла әүәсмен, фәнни әҙәбиәтте лә ҙур кинәнес менән өйрәнәм. Уңышыңдың 99 проценты - тырышлығыңдан килә. Көн һайын 14-әр сәғәт эшләйһең икән, эшең дә үҙенән-үҙе алға барасаҡ. Яныраҡ ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Төрлө китаптар өйрәнеп, "баланы тәрбиәләргә кәрәкмәй - ул барыбер үҙенә оҡшаясаҡ", тигән һығымтаға килдем. Үҙеңде тәрбиәләү зарур. Атай менән әсәй бер туҡтауһыҙ белемен камиллаштырырға бурыслы. Баланы диванда телевизор ҡарап ятып ҡына тәрбиәләп булмай. Һәр балаға матур өлгө талап ителә. 5 йәшкә тиклем ул әсәһен ҡабатлай, 5-тән 12-гә тиклем - атаһына оҡшарға тырыша, ә 12 йәштән һуң үсмергә уҡытыусы өлгөһө кәрәк.

Мәғлүмәттең күплеге, тормоштоң тынғыһыҙлығы арҡаһында 40-45 йәштәрҙә генә була торған "урта йәштәгеләр көрсөгөн" хәҙерге быуын 15 йәштә үк кисерә. Үсмерҙәрҙә үҙ-үҙеңдә "ҡаҙыныу" көслө. Улар ярайһы ғына тормош юлы үткән, хаталанып та, ниндәйҙер үрҙәргә артылып та өлгөргән өлкән кешене хәтерләтә. Үсмерҙәрҙең былай тиҙ "өлгөрөүенән трагедия яһарға, унан бигерәк, яңы йәшәй башлаған кешенең дәртен һүрелдерергә ярамай. Әйткәндәй, яҡшы кино ла йәш быуынға үҙенсәлекле ярҙамсы. Миңә һиндтарҙың традицион мәғариф системаһындағы хаталар тураһында бәйән иткән "Өс иҫәр" ("Три идиота") фильмы оҡшай. Бөтөн балалар ҙа - һәләтле, ҡайһы берҙәренең һәләттәрен асыу өсөн шарттар тыуҙыра белергә генә кәрәк, тигән аҡылды алға һөрә "Өс иҫәр". Һигеҙенсе, туғыҙынсы синыфта уҡыусыларға ҡарарға тәҡдим итәм.

**▸ Берҙәм дәүләт имтихандарына һеҙ эшләгән Репетитор үҙәгендә әҙерләнеү ҡайһы яғы менән отошло?**

**Вадим:** Республика башҡорт лицейында эшләгәндә, башҡа синыфтарҙан көслөлөгө менән айырылыбыраҡ торған бер синыф бар ине. Ошо синыфта дәрестә үҙен әллә ни күрһәтә алмаған уҡыусым булды. Дәрестә әүҙемлеге менән айырылып тормаһы, материалды үҙләштереү ҙә ауырыраҡ бирелде. Мин дә, педагог булараҡ, уға етерлек иғтибар бирә алмағанмындыр инде. 5-7 синыфтарҙа атаһына берәй репетитор менән шөғөлләнеп ҡарарға кәңәш бирҙем. Лицейҙан китеп, Репетитор үҙәге асҡас, әлеге уҡыусым беҙгә йөрөй башланы. Үҙәктәге төркөмдәрҙә балалар лицейҙағы кластан аҙыраҡ һәм һәр уҡыусыға иғтибар күберәк бүленә, шуғалырмы, әлеге уҡыусы үҙе менән бер кимәлдәгеләр араһында иң көслөһө булды ла китте. Яңы көс менән дәртләнеп, математика өйрәнде, материалды башҡаларға ҡарағанда ике-өс тапҡырға еңелерәк үҙләштереү менән беҙҙе лә, ата-әсәһен дә ҡыуандырҙы. Бер ҡараһаң, уҡытыусы ла, предмет та, дәреслек тә үҙгәрмәне. Балаға иғтибар ғына артты. Һөҙөмтә - күҙ алдында.

**▸ Мәктәптең ҙурлығы-бәләкәйлеге мөһим роль уйнаймы? Баланың мөмкинлектәре, һәләтлеге ҡайҙа нығыраҡ асыла? Ғөмүмән, бала шәхесен формалаштырыуҙа уҡытыусының ролен нисек баһалайһығыҙ?**

**Вәхит:** Мин Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Сибайҙа балалар уҡыттым. Ул ҡалаларҙағы уҡыусыларҙың ниндәй һөҙөмтәләргә өлгәшеүенән сығып фекер йөрөткәндә, ҙур ҙа, ныҡ бәләкәй ҙә булмаған мәктәптәр иң унайлыһы, минеңсә. Бәләкәй ауылдарҙа ярыш сәме бик булмай. Көслө бала "ойой". Ҙур мәктәптәрҙә, киреһенсә, конкурентлыҡ артыҡ ҙур, Вадим әйткән миҫалдағы һымаҡ, бала үҙ мөмкинлеген тулыһынса тормошҡа ашыра алмай. Ә уҡыусылар һаны уртаса булған мәктәптәрҙә уҡыусылар үҙҙәрен яҡшыраҡ тоя. Әлбиттә, башҡа факторҙар тураһында ла оноторға ярамай. "Баламды, әйҙә, мәктәп кеше итһен", тип, бөтөн яуаплылыҡты уҡытыусы иңенә һалған, үҙенең бурыстары тураһында онотҡан ата-әсәләр ҙә бар. Ундай ата-әсәләргә уҡыу, шәхесте формалаштырыу процесы - ул өҙлөкһөҙ дауам итә торған комплекслы хеҙмәт икәнен хәтерҙәренә төшөрөргә ине. Баланы өйҙә - атай-әсәй, олатай-өләсәй, балалар баҡсаһында - тәрбиәселәр, мәктәптә - уҡытыусылар, юғары уҡыу йортонда кураторҙар үҫтерә. Беҙҙең Республика башҡорт лицейының шул яғы һәйбәт: интернат системаһы булғанға күрә, тәрбиәләнеүселәр тәүлек әйләнәһенә ҡараулы.

**Айнур:** Уҡыусыларҙың уңышы мәктәптең ҙур йәки бәләкәй булыуынан түгел, ә уҡытыусының ниндәй белемгә, тәжрибәгә эйә булыуынан тора. Шулай уҡ уҡытыусы абруйы тигән төшөнсә ҙур роль уйнай. 50-се йылдарҙағы нәфис фильмдарҙа ут-һыу кискән ир-егет, ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар образдары киң яҡтыртыла. Ошо быуын уҡытыусылары илде аяҡҡа баҫтырған, улар кадрҙар тәрбиәләгән, кешене йыһанға осорған. Торғонлоҡ осоронда йәйлап-йәйлап төрлө фильмдарҙа хәмер эскән, тәмәке тартҡан уҡытыусы образы барлыҡҡа килде. Уҡытыусы спиртлы эсемлек эсә аламы? Ҡунаҡта түгел, хатта үҙ өйөндә лә эсә алмайҙыр, тип һанайым. Уҡытыусы - идеаль кеше. Бындай насар ғәҙәт уға бөтөнләй ят булырға тейеш. "Уҡытыусы ла - кеше" тип аҡланыу урынһыҙ.

Химияла "әүҙемләштереү көсө" тигән төшөнсә бар. Баланың ҡатмарлы мәсьәләне сисерлек мөмкинлеге бар икән, уға үҙе артыла алырлыҡ бәләкәй генә түбәләсте күрһәтһәң, ул шуға менеп етә. Бәләкәй убаға менгәндән һуң ул дәртләнеп, бейегерәк тауға үрмәләргә тотона. Уҡыусы мәсьәләләрҙә шул рәүешле сисергә өйрәнеп алдымы, уға тормош һынауҙары ла ҡурҡыныс түгел. Бала уларҙы ла ошо юл менән хәл итергә өйрәнә һәм ҡыуаныс кисерә. Уҡытыусының ролен мин тап ошондай уҡыусыларҙы күп булыуҙан сығып баһалайым.

**Вадим:** Бөгөнгө ҡайһы бер йәш уҡытыусылар мәктәпкә башҡа эргә эш булмағанлыҡтан, сараһыҙлыҡтан килә. Был бик ҡурҡыныс күренеш. Беҙ иһә үҙебеҙ уҡыған Республика башҡорт лицейыбыҙҙы яратабыҙ, шуға ла ҙур теләк менән унда уҡытырға килдек, педагогиканы йәшәү рәүешебеҙ итеп һайланыҡ...

**Айнур:** Эйе, ошо лицейҙы тамамлаған, вузда уҡып, инженер һөнәре алған ир-егеттәрҙең ҡабат лицейға уҡытырға ҡайтыуы - үҙенсәлекле күренеш. Миңә йыш ҡына уҡытыусылар кәңәшмәләрендә ҡатнашырға тура килә. Мин унда химия уҡытыусыларынан берҙән-бер ир-егет булып сығам һәм гел иғтибар үҙәгендәмен. Ғөмүмән, беҙҙең лицей миҫалынан сығып ҡарағанда ла, балаларҙың шәхес булып формалашыуында, бейек үрҙәр яулауында уҡытыусының, бигерәк тә ир-егет уҡытыусының роле баһалап бөткөһөҙ.

**▸ Һеҙҙең лицейҙа тик малайҙар ғына уҡый. Был факт уҡыуҙа, тәрбиә эшендә ниндәй ыңғай һөҙөмтәләр бирә?**

**Вәхит:** Мәктәптә енес билдәһенән сығып бүлеп уҡытыу гендерлы уҡытыу тип атала. Әлеге көндә Өфөлә, белеүемсә, гендер буйынса ике мәктәп - беҙҙең лицей һәм Республика иҡтисад лицейы ғына эшләй. Гендерлы уҡытыу Рәсәйҙә һирәк осрай, шуға сәйер күренә. Ысынында, ул беҙгә ят түгел. Тарихҡа ҡараһаҡ, Совет власына тиклем Башҡортостанда мәғариф тик ошо системаға ҡоролған булған. Революциянан һуң власть яңы белем биреү стандарттары индергән. Перспективала иһә, минең уйымса, Башҡортостандағы иң алдынғы мәктәптәр ошо типта уҡытыуға күсеүе бик мөмкин. Балаларҙы мәктәптә енес буйынса бүлеп уҡытыу халыҡҡа яҡшы таныш һәм тәрбиә йәһәтенән уңайлы. Малайҙар ҡыҙҙарға әүрәмәй, иғтибарын уҡыуға ғына йүнәлтә.

**Вадим:** Мәғариф өлкәһендә иң бай тәжрибәгә эйә Бөйөк Британияла гендерлы уҡытыу моделе менән белем биргән бай тарихлы бихисап шәхси мәктәп бар. Алға киткән илдәр ҙә гендерҙың ыңғай яҡтарын таный. Был - бер. Икенсенән, егет менән ҡыҙ -



*ВАДИМ:*

*Уңышыһыҙ тәрбиә циклы ғаиләнән башланып, ғаиләгә кире әйләнеп ҡайта һәм ҡабатлана ла ҡабатлана.*



*ВӘХИТ:*

*Юрий Никулин әйтмешләй, әгәр һәр беребеҙ берәй кешене йылмайтһаҡ, был донъяла күңелһеҙ кеше ҡалмаясаҡ*



*АЙНУР:*

*Баланы диванда телевизор ҡарап ятып ҡына тәрбиәләп булмай. Һәр балаға матур өлгө талап ителә.*

✓ **Ә ни өсөн БДИ ҙур борсолоуҙар тыуҙыра һуң? Сөнки уҡыусылар уға үҙ ваҡытында әҙерләнмәй. Әҙерлекте һуҙып киләләр-киләләр ҙә, салғыйҙарына ут ҡаба башланымы, йүгерергә тотоналар.**

# ИМТИХАНЫН БИРЕРГӘ КӘРӘК, түгел...

икеһе ике кеше, ике донъя. Мәктәптә, һуңынан - университетта бер ҡаҙан эсендә ҡайнағас, улар, ирекһеҙҙән, бер иш холоҡлоға әйләнә. Өҫөнсөнән, тормоштағы күп кенә хәлдәрҙә ҡатын-ҡыҙ инициативаны үҙ ҡулына алып өлгөрә. Әммә был ир-егет һәлкәү тигәнде аңлатмай әле. Ир-егет күп уйлана, әммә эшен эшләп ҡуя. Ҡатын-ҡыҙ эшен дә тиҙ тамамлай, эҙемтә тураһында ла артыҡ баш ватмай. Әсә кеше, карьера, тип сапҡан йортта бала ҡараусыһыҙ ҡала, телевизорға, урамға әүрәй. Уңышһыҙ тәрбиә циклы ғаиләнән башланып, ғаиләгә кире әйләнеп ҡайта һәм ҡабатлана ла ҡабатлана.

Егетте биҙәгән сифаттар ҡыҙ кешене матурламай. Ҡыҙҙарҙың бер генә сифатын егет кешегә күсерһәк тә, көслө заттан егетлек китә. Мәҫәлән, уға батырлыҡ хас. Беҙҙә иренән алда үҙе осоп-төшөп торған ҡатындарға сәйерһенеп ҡарайҙар. Ҡатын-ҡыҙҙы оялсанлыҡ биҙәй. Оялсанлыҡ егеттәрҙәге ҡайһы бер күркәм сифаттарҙы ҡыҫырыҡлай. Шуға күрә, ошондай күренештәргә сик ҡуйыу өсөн гендерлы уҡытыу ҡулай. Егеттәр менән ҡыҙҙарҙы айырым кластарҙа уҡытыу мөмкин булмаған хәлдә лә, уларҙы, һис юғы, класс сәғәттәрендә, түңәрәктәрҙә, факультативтарҙа ике төркөмгә бүлеү зарур.

**Айнур:** Гендерлы уҡытыуҙы тәнҡитләүселәр һәр ваҡыт табыласаҡ. Мин конструктив тәнҡитте көндәр буйы тыңларға риза-мын. Уңыш сере - иғтибарыңды йүнәлтә белеүҙә, тине Вәхит. Уңышҡа өлгәшкән кемде генә алма, һәр береһе үҙ алдына маҡсат ҡуйып, ошо маҡсатына төп иғтибарын йүнәлтә алған. 15 йәшлек егет менән 15 йәшлек ҡыҙҙы сағыштырып ҡараһаҡ, егет кешенең үҫеш кимәле 15 йәш кимәлендә ҡалһа, ҡыҙ кешенеке - 17 йәш. Тимәк, ҡыҙҙар тиҙерәк фекерләй, дәрестәрен дә тиҙерәк әҙерләй. Һәм егет кеше ирекһеҙҙән уңышһыҙ кеше хәлендә тороп ҡала. Бөгөнгө мәғариф системаһы супер ҡыҙҙарҙы һәм уртаҡул, уңышһыҙ егеттәрҙе тәрбиәләй. Совет мәктәбенең ыңғай яҡтары ла, етешһеҙлектәре лә бихисап. Совет мәктәбе ниндәй шарттарҙа һөҙөмтә бирә? Әгәр уҡытыусы һәр уҡыусыға, унын "итәкле"ме, әллә "салбарлы"мы икәнлегенә иғтибар итмәй, талапты бер ҡуйһа, шул саҡта йәки пионерия һымаҡ ныҡлы тәрбиә мәктәптәре яҡшы эшләгәндә, совет мәктәбе яҡшы һөҙөмтә бирә. Беҙ ҙә был системаны әҙерәк күреп ҡалдыҡ. Ә гендерлы уҡытыуға альтернатива юҡ. Ул үҙе классик белем биреүгә альтернатива. Шул уҡ ваҡытта бөтә мәктәптәрҙе ошолай итеү ҙә мөмкин түгелдер. Бында алтын урталыҡты эҙләргә кәрәк.

Ни өсөн гендерлы уҡытыу тап беҙҙең мәктәптә тормошҡа ашырыла? Сөнки уҡытыусылар коллективында яртыһынан күберәген ир-егет тәшкил итә. Уларҙың йәше лә 30-ға тиклем һәм 30 самаһы. Ир балаларҙы уларҙың атайҙары быуыны түгел, ә ағай булырҙай уҡытыусылар быуыны тәрбиәләһә, яҡшыраҡтыр, минеңсә. Йәш уҡытыусы үҙе лә мәктәп эскәмйәһенән яңыраҡ ҡына "төшкән" кеше, уҡыусыларҙы яҡшы аңлай.

Бөйөк Британияның баш ҡалаһы Лондонда Итон исемле гендерлы колледж бар. Был мәктәптә 18 премьер-министр, шул иҫәптән, бөгөнгө премьер министр Д. Кэмерон тәрбиәләнгән. Ә ошо колледжды тамамлаусылар араһында шәхси тормошон яйға һала, ғаилә ҡора алмағандар булдымы икән? Уларҙан берәйһе үҙен "мин джентльмен түгел" тип һанаймы икән? Бында ысын ир-егеттәргә хас сифаттар тәрбиәләнеүенә шикләнмәйем. Беҙҙең егеттәр ҙә шулай - улар шул тиклем шәптәр: үҙҙәренең дәрәжәһен юғары тоталар.

▸ **Берҙәм дәүләт имтиханының ыңғай һәм кире яҡтарын һанап китәйек әле. Был имтиханды бит кемдәрҙер яманлай, кемдәрҙер маҡтай, практиктар булараҡ, һеҙ ниндәй фекерҙә?**

**Вәхит:** Берҙәм дәүләт имтиханының ыңғай яҡтары бик күп. Мәҫәлән, тап БДИ һөҙөмтәләре беҙҙең йәштәр өсөн Мәскәүҙең, Санкт-Петербургтың, хатта сит илдәрҙең уҡыу йорттарына "йәшел юл" асты. Ә ни өсөн БДИ ҙур борсолоуҙар тыуҙыра һуң? Сөнки уҡыусылар уға үҙ ваҡытында әҙерләнмәй. Әҙерлекте һуҙып киләләр-киләләр ҙә, салғыйҙарына ут ҡаба башланымы, йүгерергә тотоналар. Шул саҡта баш ауырыуы башлана ла инде. Ысынында, мәктәптә Берҙәм дәүләт имтиханы бирәсәктәрен барыһы ла белеп тора, план буйынса, әкренләп кенә әҙерләнһәң, бер ниндәй күңелһеҙ хәлдәргә урын ҡалмаҫ ине. БДИ-ның шуныһы уңайлы - һин уҡыйһың-уҡыйһың да, ахыр сиктә, белемеңде тикшерәләр. Был бик шәп нәмә. Үҙемдән алып әйтәм: БДИ-ға әҙерләнгәндә йонсоп йөрөгәнемде хәтерләмәйем дә. Бөтөнләй көсәнмәнем, ыҙаламаным. 11-се синыфта планлы рәүештә әҙерләнә, дәрестә күнегеүҙәр сисә торғайныҡ. Дәрестән һуң да ҡала инек. БДИ - универсаль, унын ыңғай, уңайлы яҡтары ла шунда. Тапшыраһың да, һинең өсөн күп ишектәр асыла. БДИ-ға ниндәйҙер "ҡиәмәт көнө" итеп ҡарарға ярамай һәр хәлдә.

Беҙҙең лицей - алдынғы, шуға БДИ-ны бирә алмаған балалар юҡ. Бөтәһе лә юғары уҡыу йортона уҡырға инә. Ә ауылдарҙа хәлдәр насарыраҡ. Берҙәм дәүләт имтиханы иң ауыр һынау, тип уйлай улар. Етмәһә, балаларҙы ата-әсә лә ҡурҡыта. 9-сы синыфтан һуң: "Һин БДИ-ны бирә алмаясаҡһың ул барыбер, шуға колледжға, ПТУ-ға, лицейға бар", - тип, балаларҙы таратып бөтәләр ҙә, 11-се синыфта ауылдарҙа балалар ҡалмай. Бында педагогтарҙың ғәйебе лә юҡ түгел, профориентацион эш алып барылмай, балалар үҙҙәренең киләсәгенә әҙерләнмәй. Һәм ошо бөтә факторҙар бөтәһе бергә уҡмашып, стресс тыуҙыра ла, БДИ - насар, тигән һүҙ китә. Әгәр ошо етешһеҙлектәрҙе бөтөргәндә, БДИ-ның күңелһеҙ яҡтары күпкә аҙ булыр ине, тип уйлайым. Тормоштағы башҡа хәлдәргә лә ошо күҙлектән ҡарарға кәрәк...

Иң насар хәлде күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Бала БДИ-ны бирә алманы, ти. Әгәр балаға: "Имтихандарҙы бирә алмаһаң да, ҡурҡырлыҡ нәмә юҡ, юғары уҡыу йортона түгел, ә колледжға, урта махсус белем биреү учреждениеһына барырһың да, уны тамамлағас, вуздың ситтән тороп уҡыу бүлегенә керерһең", - тигән фекерҙе үҙ ваҡытында еткерһәләр, альтернативаны күрһәтһәләр, балалағы стресс күпкә әҙерәк булыр ине. Юҡһа, БДИ-ны бирә алмағаны өсөн үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары ла булды. Ни өсөн? Сәбәбе билдәле: альтернатив юлды күрһәтмәү. Мин 7-се синыфтан алып Өфө дәүләт нефть техник университетына уҡырға барырға хыялландым. 11-се синыфта атай: "Улым, әгәр ҙә бюджет урынына инә алмаһаң, ярҙам итербеҙ, түләп уҡытырбыҙ. Әгәр бөтөнләй үтә алмаһаң, был да ҡурҡыныс түгел", - тине. Ҡыҫҡа ғына был һөйләшеүҙән һуң минең күңелем тынысланды.

**Вадим:** Дәреслектәр буйынса бер нисә кәңәш. Күпселек мәктәптәр математиканы Мордковичтың дәреслеге буйынса уҡый. Макаренконыҡы, Мартынюктыҡы ла бар, әлбиттә. Әммә иң киң таралған автор - Мордкович. Ҡәҙимге көслө генә дәреслек. Әгәр Мордковичты уҡытыусы алып уҡый икән, уға дәрес планы, дәрес конспекты яҙырға ла кәрәкмәй. Ул шул тиклем яҡшы уйлап төҙөлгән. Үҙаллы шөғөлләнә алған бала Мордкович китабын уҡытыусыһыҙ ҙа уҡый алыр ине. Беҙ ошо китаптарҙы Европалағы коллегаларға күрһәттек. Улар: "Юҡ, беҙгә бындай китаптарҙы файҙаланыу ҡурҡыныс. Юғиһә, уҡыусылар уҡытыусыларҙан баш тартасаҡ", - тинеләр.

БДИ-ның тағы бер ҙур ыңғай яғы - ул коррупцияны әҙәйтә. 2006 йылда беҙ лицейҙы тамамлағанда БДИ системаһы ла, юғары уҡыу йорттарында эске имтихандар ҙа бар ине. Тимәк, бала өс БДИ имтиханы биреп, бынан тыш, вуздың үҙендә шул предметтар буйынса һынауҙар тоторға тейеш ине. Етмәһә, имтихандарҙың һөҙөмтәһе августа ғына билдәле була. Әгәр икеле булһа? Бала өсөн был - ахырызаман! Ошондай шарттарҙа юғары уҡыу йорттарының ҡайһы берҙәре коррупцияға ла юл ҡуйҙы. Хәҙер иһә бөтөн "эске" имтихандар ҙа бөтөрөлдө, БДИ һөҙөмтәһе буйынса ғына уҡырға инеү мөмкинлеге тыуҙырылды. Шәп бит! Әлбиттә, бер нисә йыл элек БДИ-ның яуаптарын һатыусылар ҙа булды. Һуңғы ике йыл эсендә улар күҙәтелгәне юҡ.

Профориентация тураһында ла әйткем килә. 11-се синыфта профориентация башлау - һуң, уны 9-сы синыфтан башларға кәрәк. Бөгөн беҙҙең мәктәптәрҙә балалар математика менән рус теленән тыш, ғәҙәттә, үҙе иң һәйбәт белгән өсөнсө предметтан БДИ бирә. Ҡайҙа уҡырға барырға теләүен иҫәпкә алмайынса, бала киләсәктә уға кәрәк булмаған предмет буйынса ла имтихан биреп ҡуйырға, шул һөҙөмтәләр буйынса уҡырға инергә мөмкин. Был дөрөҫ түгел, минеңсә. Киреһенсә, киләсәктә кем булырға, ҡайҙа уҡырға теләүеңдән сығып һайларға кәрәк имтихан бирә торған предметты.

Күп кенә 11-се синыф уҡыусылары юғары уҡыу йортона ингән саҡта БДИ-ға өҫтәмә рәүештә ун балл алырға мөмкин икәнен дә белмәй. Ә был балдарҙы нисек йыйырға? Мәҫәлән, ГТО билдәң бар икән, ҡайһы бер уҡыу йорттары уға бер-ике балл өҫтәргә мөмкин. Волонтерлыҡ карточкаһы булғанда тағы бер-ике балл өҫтәлә. Декабрь айында рус теленән иншаңды уңышлы яҙып, документыңдың бер урынында ғына "инша" тип теркәп ҡуйҙың икән, бына һиңә - 4 балл. Фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашҡанһың, маҡтау ҡағыҙҙарың бар икән - бының өсөн алты балл өҫтәлә. 9-сы синыфта уҡ балаға был турала әйтеп ҡуйғанда, уға артабан 10 балды йыйыуы бөтөнләй ҡыйын булмай сыға. Уҡырға ингәндә ул ун балл ныҡ ярҙам итә.

**Айнур:** Лицейҙа беҙ профориентация менән шөғөлләнәбеҙ. Мәҫәлән, 8-се синыфтан химияны тәрәндән өйрәнәбеҙ, йәйге мәктәптәр ойоштorабыҙ, Мәскәүгә барып, белемебеҙҙе камиллаштырабыҙ. Былар төбәк һәм абитуриенттар олимпиадаларында үҙ һөҙөмәләрен бирә. Ҡайһы бер юғары уҡыу йорттары үҙҙәре олимпиадалар үткәрә. Унда еңеүселәргә 10 балл өҫтәлә, призлы урын алыусыларға - 7 балл. Мәсьәләләр ул тиклем ауыр түгел. Әгәр һин "С" бүлегенән күпмелер мәсьәләне сисә белһең икән, тимәк, призерҙар исемлегенә инә алаһың, тигән һүҙ. Олимпиадаларҙа еңеүселәр БДИ биргәнгә тиклем үк 100 балл йыйған була. Һөҙөмтәлә, улар уҡыу йорттарына конкурсһыҙ инеп китә.

Олимпиадаларҙа ҡатнашып та, һөҙөмтәгә өлгәшә алмаусыларҙың да белем нигеҙе яҡшы. Был төркөмгә ҡараған уҡыусылар яҡшы итеп әҙерләнһә, БДИ-ның һөҙөмтәһе 100 балға яҡын булырға мөмкин.

▸ **Йәштәргә ниндәй теләктәрегеҙ бар?**

**Вадим:** Йәштәргә иң беренсе теләк - егеттәр ҙә, ҡыҙҙар ҙа үҙҙәрен ҙур шәхестәр менән сағыштырһын. Ул мәлдә илһөйәрлек тә, үҫешкә ынтылыш та булыр. Кеше теләһә, юлдар һәр ваҡыт асылып тора ул. Үҙҙәрен ҙур шәхестәргә тиңләһендәр.

**Вәхит:** Төшөнкөлөккә бирелмәһендәр, оптимист булһындар, сөнки кешегә һәр ваҡыт "эйе-юҡ", "аҡ-ҡара", "изгелек-яуызлыҡ" араһында һайларға тура килә. Һәр нәмәлә әҙ генә яҡшылыҡ та, әҙ генә насарлыҡ та бар, тип буталмаһындар. Ысынында, барыһы ла күпкә ябайыраҡ. Тик яҡшыға, яҡтыға ғына ышанып, бөтә ерҙә лә позитив эҙләһендәр, ыңғай көстө үҙҙәренә алһындар һәм таратһындар. Юрий Никулин әйтмешләй, әгәр һәр беребеҙ берәй кешене йылмайтһаҡ, был донъяла күңелһеҙ кеше ҡалмаясаҡ. Шуның кеүек, һәр беребеҙ һис юғы бер кешегә яҡшылыҡ эшләһәк, донъя үҙгәрәсәк. Үҙебеҙ яҡшы булып, яҡшылыҡ, яҡтылыҡ өләшеп йәшәйек! Донъя беҙгә матур тойола ул. Шулай ҙа ул тағы ла матурыраҡ.

**Айнур:** Минең 15 йәшлектәргә өндәшкем килә. Минең уҡыусыларымдың уртаса йәше 15 йәш. Үҙ-үҙеңдә ҡаҙыныу менән шөғөлләнергә кәрәкмәй. Бөтөн нәмә менән дә ҡыҙыҡһынығыҙ, бар эштең дә файҙаһы була. Күп уйланығыҙ, ныҡ уйланығыҙ. Һеҙгә күндерелгән нигеҙ, йәшәйеш асылы - дөрөҫ нигеҙ ул, унан шикләнмәгеҙ. 15 йәштә бөтә нәмә менән дә ҡыҙыҡһыныу мотлаҡ. Иң мөһиме - кире күренештәрҙән һаҡланырға кәрәк. Наркоманиянан, алкоголле эсемлек эсеүҙән, тәмәке тартыуҙан ситләшһәгеҙ, донъяның шул тиклем күп ҡырлы, ҡыҙыҡлы булыуын аңларһығыҙ. Нимәләлер мәғәнә табасаҡһығыҙ, уныһына иманым камил. Үҙегеҙҙе табыуығыҙҙы теләйем, ул сағында һеҙ бәхеттән һәм уңыштан ҡасып та ҡотола алмаясаҡһығыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында тәрән уйҙарға бирелеп, Вадим Ниғмәтуллин, Вәхит Бағышаев, Айнур Ғүмәров һынында Мифтахетдин Аҡмулланың, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың, Жәлил Кейекбаевтың һәм башҡа зыялыларыбыҙҙың йәш саҡтарын күҙ алдына килтереп ултырҙым. "Алтылағы - алтмышта" тигәндәре шулдыр. Ҡунаҡтарҙы тыңлап, белемде камиллаштырыу теләге тағы ла нығыраҡ артты. "Ошондай шәп уҡытыусылар ҡанаты аҫтында тәрбиәләнгән балалар үҙҙәренең бәхетле икәнлеген беләме икән?" тигән һорау ҡыҙыҡһындыра әле мине...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Тыумаҫ элек тә, тыуғас та бәпес тойған, ишеткән naҙлы һүҙҙәр уның физик һәм психик торошона, сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай. Ырымдар, һамаҡтар, көйлө теләктәр, моңдар, имләүҙәр, доғалар - тере һыуҙай им-шифа.***






Ырыҫйән уҙаман баҡсаһындағы урындыҡҡа, ерҙең эйәһеләй йәйрәп ултырып, йәнә уйға ҡалды. Иseме есеменә тап килеп, ырыҫлы, бәхетле йән булды ул. Күп йәшәне, күпте күрҙе, кисерҙе, белде. Йәшәүҙең асылын, мәғәнәһен тәрәнерәк төшөнөргә тырышты, аҡыл өсөн ҡарттарҙың ҡарһүҙен тыңланы, уҡымаған китабы ҡалманы, балаларға белем өләште. Һәр йәһәттән һәләтле ине. Йыйындарҙа халыҡ йырҙарын йырланы, ҡурайҙа уйнаны, ҡобайырҙар һөйләне, алғыштар әйтте, ҡәрҙәштәренең күңелен асты, дәртһеҙҙе дәртләндерҙе, моңһоҙҙо моңландырҙы. Аллаға шөкөр, уландары ла өҙҙөрөп ҡурай тарта, белем тигән йәншишмәнән ғилем һыуын эсә. Ырыҫйән хикмәтле һүҙ, тылсымлы йыр-моң менән фани донъяның серҙәрен сағыуыраҡ, баҙығыраҡ төшөндө. Әммә, шағир әйтмешләй, "Ғүмер ҡыҫҡа... Донъя шундай матур, артҡан һайын арта ҡәҙере. Барыһын да биреп ҡалыр кәрәк, алмаҫ элек мине ҡәберем. Тояm инде ул көн килеп етер"... Ҡанбабалар, ата-олатайҙар янына юлға сығырға ла ваҡыт күп ҡалмайҙыр...

## Им дә, ағыу ҙа

Хозур шәғбан айының йома кисе ине. Ырыҫйән уҙаман сөңкәләргә ҡымыҙ ҡойоп, йәйге ялға ҡайтҡан улдарын әңгәмәгә әйҙәне.

- Һәр ата-инә балаларына ғүмере буйы кәңәш бирә, һуңынан аманат ҡалдыра. Минең алтын мираҫым иһә - аҡыл, рух, һүҙ ҡөҙрәте. Һеҙ байтағына эйәһегеҙ ҙә инде. Әммә минең тормош, ғүмер тураһында уйҙарым, уртаҡлашыр фекерҙәрем, әйтер һүҙҙәрем һис тә бөтмәгән әле. Алғыһап торған толпар һымаҡ тулышҡан ниәттәремде, уй-теләктәремде һеҙгә еткерергә йөрәкһенәм. Иркенләп һөйләшеп ултырайыҡ әле, - тине ул улдарының йөҙҙәренә бағып. Улар иһә, етди, тышҡы үә эске тороштары, фиғел-күңелдәре менән атайҙы мөкиббән китеп тыңларға әҙерҙәр ине.

- Һүҙемде алыҫтаныраҡ башлайым. Япондарҙа этник фекерләү тигән төшөнсә бар. Балалары биш-алты йәшкә тиклем фәҡәт туған телендә уйларға, аралашырға тейеш. Быға иғтибар итмәһәк, генийҙарҙы юғалтабыҙ, тиҙәр. Сөнки фекер ғәйәт ҡөҙрәтле, рухи үә ижади. Ул тел, телмәр аша һүҙ менән асыла, беленә, баһалана һәм уның сағылышы, әйтелеше, эстәлеге, ғәйрәте йәшәйешкә, кешенең зиһененә йоғонто яһай, уны үҙгәртә, үҫтерә, милли үҙенсәлектәрҙе һаҡлай... Этник фекерләү төрлө халыҡтарҙың әйтемдәрендә лә сағыла. Әйтәйек, ошо күренешкә ҡарата урыҫ: "Саҡырылмаған ҡунаҡ татарҙан яман" тиһә, башҡорт: "Саҡырылмаған ҡунаҡ - Тәңре ҡунағы", - ти. Башҡортта, йола буйынса, ят әҙәмгә лә һәр саҡ хөрмәтле үә әҙәпле мөнәсәбәт. Күрәһегеҙ, ҡапма-ҡаршы ҡараш, уй-фекер. Славян халыҡтарында әкиәт, ғәҙәттә, "в некотором царстве, в некотором государстве" тип башланһа, башҡорт әкиәттәре "борон-борон заманда" тип башлана. Айырма нимәлә? - Ырыҫйән уҙаман мыйыҡ аҫтынан йылмайҙы.

- Славяндар бында аралыҡ, ер, урын ҡарашынан фекерләһә, башҡорт ваҡыт төшөнсәһе буйынса йәшәү рәүешенән сығып фекерләй. - Шулаймы, тигәндәй, оло улы Камил атаһына баҡты.

- Аныҡ һәм дөрөҫ яуап. Уй-фекер, һүҙ аша ҡәүемдәрҙең ҡылыҡтары, донъяға ҡараштары, рухи һәм психик үҙенсәлектәре тоҫмаллана. Зыялыбыҙ Әхмәт уҙаман Сөләймәнов, әңгәмәләшкәндә, бер ғибрәтле әкиәтте миҫал итеп килтергәйне. Батша хеҙмәтсеһен үҙе төшөнмәгән ғиләнең серен белергә ебәрә. Берәү гәүһәрҙе ҡом һымаҡ онтай ҙа елгә осора, он һымаҡ онтай ҙа елгә осора, ти. Был ни хикмәт? - Ырыҫйән йәнә улдарына ҡараны.

- Шәйләмәйһегеҙме? Сабирйән сәсән быға шулай яуап биргән:

*Тарауалдан Кинйәбай,*
*Һөйләгәндә - донъя байы.*
*Артына сығып ҡараһаң,*
*Күренеп тора ҡурҙыбайы,* - уландар түҙә алмай көлөп ебәрҙе.

- Был әйтемдә - ниндәй ысынбарлыҡ, тапҡырлыҡ! Шәпбеҙ, тип, тиҫтә-тиҫтә йылдар буйы сит илдәрҙә ниҙәр генә төҙөмәйбеҙ, уларға ниндәй генә ярҙам күрһәтмәйбеҙ. Ә үҙебеҙҙең...

Өнһөҙ, һүҙһеҙ, телһеҙ йәшәү юҡ. Ҡанбабалар тапҡыр һүҙ менән тормош күренештәренә, ваҡиғаларына баһа биргән, һүҙҙең магик көсөнә инанған. Мәҫәлән, боронғо замандарҙа һунар уңышлы булһын өсөн, ҡыр-урманға барыр алдынан усаҡ тирәләй бейегәндәр, һикергәндәр, ритмлы өн, шиғри өн менән һамаҡлағандар. Шулай иткәндә һунарҙары уңышлы тойолған. Бер нәмә лә тиктәҫкә генә эшләнмәгән, ҡылынмаған, һәр нәмәгә мәғәнә һалынған. Был хаҡта изге яҙмаларҙа ла әйтелгән, магик ҡөҙрәткә эйә Библия менән Ҡөрьәндә лә теркәлгән. Сүрәләр, аяттар, доғалар, мөнәжәттәр көйләп уҡыла. Ошолай күңелдәргә нығыраҡ тәьҫир итә, хәтергә йәһәтерәк уйыла, йөрәктәр тыныслана. Доға уҡыһаң, һыу, сәй имләнә, шифалы эсемлеккә әйләнә. Һүҙ йоғонтоһон яҡшы аңлап, әүәл башҡорттарҙа буйға ҡалған, бала көҫәгән ҡатын-ҡыҙ янында, ағинәйҙәрҙең аманаты буйынса, ҡәрҙәштәр бер-береһе менән фәҡәт йәнгә им, ләззәт бирерҙәй һүҙҙәр менән генә һөйләшкән. Атай кеше инәлектә ятҡан сабыйға яғымлы тауыш менән йыш-йыш өндәшкән:

- Мин һинең атайың булам, тыуыуыңды һағынып көтәм, балам.

Әлбиттә, һүҙ магияһы мөғжизәһеҙ ҡалмаған, бәпес тыуғас, атаһының тауышына иғтибар иткән, боролоп ҡараған. Яҡты донъяға килгәнсе, наҙлы көй, ҡурай моңо ла ишетһә, бала рухи үҫеш йәһәтенән камилыраҡ була, тигәндәр. Өләсәйҙәр тылсымлы һүҙ менән ипле бала теләгән:

*Һылыу булһаң, тыйыу бул,*
*Малай булһаң, ҡыйыу бул.*
*Ҡыҙ булһаң, ҡыҫарҙан бул,*
*Ҡуш ҡуллап һуҙарҙан бул...*
*Ул булһаң, уҙаман бул,*
*Устан ашып, алға тул,*
*Дуҫтарыңды көтөп ал,*
*Дошманыңды етеп ал.*

Кендекәйҙәрҙең дә телдәре йомшаҡ, теләктәре изге:

*Тыу, бала, тыу, бала,*
*Инәңә иш бул, бала,*
*Атаңа ҡуш бул, бала,*
*Өйөңә ҡот бул, бала.*

Йыуындырғанда ла, туғандарына күрһәткәндә лә, ауылдаштар килгәндә лә, тәү тапҡыр тәғәм биргәндә лә, исем ҡушҡанда ла, һикерткәндә лә, һөйгәндә лә, бәүелткәндә лә, йоҡонан уятҡанда ла, тәпәй йөрөткәндә лә, кейендергәндә лә, бишек туйында ла балаларҙы гелән тылсымлы һүҙҙәр менән һуғарғандар. Ни өсөн шулай иткәндәр, Камил? Һин бит йән белгесе.

- Тыумаҫ элек тә, тыуғас та бәпес тойған, ишеткән наҙлы һүҙҙәр уның физик һәм психик торошона, сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай. Ырымдар, һамаҡтар, көйлө теләктәр, моңдар, имләүҙәр, өгөт-нәсихәттәр, доғалар - тере һыуҙай им-шифа. Сөнки улар яҡты фекергә, мәғәнәгә эйә. Йыш әйтелеп, төпкөл аңға етәләр, йәғни йәшәүгә асыл, программа булалар.

Яҡшы һүҙҙәр, изге доғалар ябай һыуҙы шифалы итһә, яман һүҙҙәр, хатта ки ышаныуы ла ҡыйын, кеше тәнендәге һыуҙы ла ыуға әйләндерә. Тупаҫ, мыҫҡыллы, кәмһетеүле һүҙҙәрҙең тәьҫирен белгестәр генетик үҙенсәлектәрҙе үҙгәрткән радиоактив нурланыш менән сағыштыра. Алама мөғәмәлә һөҙөмтәһендә күҙәнәктәрҙәге нәҫел сифаттарын йөрөткән матдәләр төҙөлөшөн үҙгәртә һәм хатта үҙ-үҙҙәрен харап итеп, артабанғы быуындарға бирелә.

- Иҫ китерлек бит... Ата-бабалар ғалим булмаһалар ҙа, быны ҡан аша, етенсе тойғо аша һәйбәт белгән.

- Атай, мин фекеремде әйтеп бөтмәнем әле. Шулай итеп, йөрәкте әрнеткән, рәнйеткән һүҙ, ауыр хәбәр, ғәйбәт, яла яғыу, йәберләү кеше һаулығына - ағыу. Тормошта күҙәтелеүенсә, хистойғо, кисереш хәленә, психологик торошҡа ҡарап, яман һүҙ кешене шаҡ ҡатырыуы, һынһыҙ итеүе, телһеҙ-өнһөҙ ҡалдырыуы, сиргә һабыштырыуы ихтимал. Һүҙҙең көсө эске органдар менән бәйле. Ул нервы импульстарын үҙгәртергә, күҙәнәктәрҙең, ғөмүмән, бөтә тәндең эшмәкәрлегенә йоғонто яһаған биофизик һәм биохимик барыштарҙы ла боҙоуы мөмкин.

- Хәтәр икән, хәтәр...

## "Йолҡоп алдым йөрәгемде"

Барыһы ла бер аҙға тын ҡалды. Кәкүк айы икәнен иҫләтеп, кәкүк саҡыра башланы. Ырыҫйән уҙаман ҡымыҙ йотоп алды ла, "Быйыл ғына сыҡҡан бала кәкүк саҡыра белмәй саҡыра тау-ташта", тип, йырлап эйҙе. Улдары ла ҡымыҙ уртлағас, йәшерен тәбиғәт серен асҡандай, ниндәйҙер шом белдергән, әммә тыныс тауыш менән әйтерен дауам итте:

- Бәғзе һәләтле һыу һөлөгө кеүек егеттәребеҙҙең, йөҙөк ҡашындай ир-уҙамандарыбыҙҙың тетрәткес яҙмышы, мәле етмәҫ әүәл әхирәткә китеүе хәсрәтле уйҙарға һалды мине. Нилектән улар бәғерҙәрҙе телерлек фажиғәгә дусар? Ғәжәп шағир Рәшит Назаров, һоҡланғыс йырсы Райман Ишбаев... Белеүебеҙсә, Рәшит аралашырға әллә ни ынтылып, атлығып, һис кенә лә ғәйрәт сәсеп, дүнәжендәй ярһып тормаған. Тәү ҡарашҡа - үтә лә тыныс, баҫалҡы, тыйнаҡ, сабыр, хатта ки бойоҡ егет. Әммә эсендә - утялҡын, ҡойон, йөрәгендә - дауылдай, ташҡындай ярһыу хистәр, тойғолар, шиғриәтендә - тос, ҡеүәтле фекерҙәр, сағыу күренештәр.

- Бәлки, ул, атай, тәбиғәттәге Янғантау һымаҡ булғандыр, тышы - һалҡын, эсе - ялҡын, - тип хәбәргә ҡушылды Камил. - Янартауҙар ҙа тыныс ҡына тора-тора ла ҡапыл вулканын урғылдыра бит.

- Ҡыуандырҙың, үтә лә образлы фекер әйттең, улым. Афарин! Тимәк, уның ярһыуы, янартауы, вулканы - иҫ киткес кисерештәр ҡуҙғытҡан, хис-тойғолар ғәрәсәте ҡуҙғатҡан Аҡбуҙат - көслө ҡанатлы шиғырҙар. Уларҙағы ҡөҙрәтле лә, сихри ҙа һүҙҙәр - йән яныуы, илаһи ҙа көстәргә тәьҫир итеп, Йыһанға ашҡан. Ун һигеҙ йәше лә тулмаған егеттең шундай рухи ғәйрәткә эйәлеге, йәшендәй йәшнәп, күктәрҙе балҡытыуы, ҡәрҙәштәрен тетрәтеүе һәм бер аҙҙан, донъяһының аҫты өҫкә килгәндәй, үкенес-көйөнөстәргә, бәлә-ҡазаға тарыуы, зиһенен ҡараңғылыҡ солғап, йән ауырыуына дусар булыуы, ҡырҡ йыл тирәһе рух ғазабы менән яфа сигеүе - һис кем аңлап бөтмәҫлек хәл кеүек. Ниһайәт, уландарым, мин бының серенә төшөндөм, буғай.

- Атай, ысынлап та, шағирҙы яҡындан белгән, уның менән һин дә мин аралашҡан туған-тыумасалары, шиғырҙарына ентекле күҙәтеү яһаған ҡәләмдәштәре лә аяуһыҙ тәҡдиренең сәбәбен аңлата алмай.

- Сөнки улар, хатта ки шағирмын тигән шағирҙар, тәнҡитселәр күптәргә аңлашылып бөтмәгән, мәғлүм дә булмаған серле нәмәнең - һүҙ тылсымының, ҡөҙрәтенең, мөғжизәһенең, зәхмәтенең, йәғни магияһының асылын төшөнмәй, ғәмәлдә, шиғри һүҙҙең образлылығына, кинәйәлелегенә, көтөлмәгән һынланышына, боролошона, әйтелешенә генә иғтибар итә.

- Һүҙҙең башынан элек төбөн уйла тигән һымағыраҡ буламы инде?

- Нәҡ шулай. Шул юҫыҡта тәрәнерәк, киңерәк фекер йөрөтәйек әле. Дини яҙмаларҙан беләһегеҙ, тәүҙә Һүҙ булған. Хатта Илаһ та. Шуға ла борон-борондан һүҙҙәр илаһи һаналған. Ҡанбабалар уларҙың ҡөҙрәтенә инанған, изге исемдәргә, Илаһ-Һүҙгә, Илаһ-Өнгә табынған. Һүҙҙәр серле лә, сихырлы ла, зәхмәтле лә, арбаусы һәм үҙенә буйһондороусы ла. Им-том, әпсен-төпсөн, ырым, арбау, юрау, ялбарыу, әмәл, теләк, үтенес, ҡарғыш һүҙҙәре. Улар мөғжизәүи көскә, тәьҫиргә эйә, аныҡлап әйтһәк: ырыҫ, аҡыл да; яҡшы, яман да; йән аҙығы, баш ҡаҙығы ла; им, ағыу ҙа; ҙурлыҡ, хурлыҡ та; ирмәк, имгәк тә; көлдөрә, бөлдөрә лә; йәшәртә, ҡартайта ла; һауыҡтыра, сиргә һабыштыра ла; терелтә, үлтерә лә... Халҡыбыҙҙың әйтемдәре, мәҡәлдәре лә шуны раҫлай: аңғармай һөйләгән, ауырымай үлгән; ауыҙың ни һөйләгәнде ҡолағың ишетһен; алдан әйткәнең артыңдан килеп тотмаһын; илай-илай һөйләгән, илап, йылан сығарған... "Саҡ менән Суҡ" бәйетен хәтергә алайыҡ. Инәй ныҡ асыуланған көйө, абайламай, улдарын ҡарғай, яман теләк, ҡәһәр уларҙың башына төшә. Минеңсә, ҡарғыш арҡаһында балалар үлеп, йәндәре ҡошҡа әйләнеп, Хоҙай Тәғәлә биргән ғүмерҙәре бөткәнсе тилмерешеп йөрөгәндәрҙер кеүек. Шуға ла ҡороп ҡалғыр, дөмөккөр, ҡапталғыр, йәнең сыҡҡыр, алҡымың тығылғыр, эт талағыр һымаҡ зәхмәтле һүҙҙәрҙе, әрләү, ҡарғау һүҙҙәрен ысҡындырыуҙан тыйылыу зарур. Яман һүҙ һөйләүҙең, шашыуҙың, насарлыҡ ҡылыуҙың, ҡәҙер белмәүҙең һуңынан килгән яҙаһы, ҡоһоро, йәғни кейәһе етеү, кейәһе төшөү була. Ағинәйҙәр аҡылынса, алғыш та төшә, ҡарғыш та төшә. Ҡарғыш ишетеүсе эстән генә: "Һин теләгән яманлыҡ алдыма килмәй, миңә изге алғыш ҡына юлдаш", - тигән. Халыҡ һынауынса, ҡарғышлы бәндә донъя рәхәте күрмәй. Йәнә шуны ла онотмайыҡ: берәү ҡарғағанда, быға яуап итеп, ҡара ҡарғышың ҡара башыңа, тиҙәр. Бында ҡара баш төшөнсәһе ҡара уй, ҡара теләк тигәнде аңлаталыр. Эт ҡарғышы бүрегә төшмәҫ, әйтеме, моғайын, шуға бәйлелер. Ә беҙ йыш ҡына ишеткән, һәммәбеҙгә лә ҡағылған ошо йырҙың: "Бер ҡасан әйтмә һин ауыр һүҙ, бик ҡыҫҡа, әй ҡыҫҡа ғүмерҙәр" тигән аҫыл һүҙҙәрен ижад иткән ҡәрҙәшебеҙҙе афарин һанайым мин.

- Филолог булараҡ, мин дә һүҙҙең кеше өҫтөнән ниндәй власҡа эйәләгелен, һис шикһеҙ, ап-асыҡ аңлайым. - Кинйәһе Илнур һүҙ алды. - Күренекле невролог һәм психиатр, шулай уҡ кешенең һәм мәҙәниәттең философик-социологик концепцияһын төҙөүсе Зигмунд Фрейд фекеренсә, һүҙ менән магия асылда бер. Һүҙ ғәжәп магик көскә эйә, ысынбарлыҡ һәм серлелек күренеше менән тығыҙ бәйләнгән. Бәғзе телселәрҙең фекеренсә, поэзия тотошлай магиянан үҫкән, ә ысын шиғыр - ижадсыны ла, уҡыусыны ла, бөтә донъяны ла үҙенсә үҙгәрткән ырым, тылсым! Шуға ла ул - ҡөҙрәтле магия! Тылсымлы һүҙ, ырым булышлығында илаһи көстәр менән бәйләнешкә инеү ҙә аҡыют түгел. Рәсәй телевидениеһынан күрһәтелгән "Экстрасенстар алышы" тапшырыуы ла быны раҫлай. Тәү ҡарашҡа мистика менән һуғарылған һымаҡ һүҙҙәр, хәлдәр, ғәмәлләшеп, бөтә нәмәне күҙ алдына килтерә. Магияны, кешенең Йыһанға, илаһи көстәргә тәьҫир итеү мөмкинлеген, быны ниндәй хәлдәргә төшөрәсәген барыбыҙ ҙа төшөнөп етмәйбеҙ әле.

- Шулай шул, улым. Шиғри илһам, дәрт, ялҡын менән дөрләгән, көслө хистәр менән ярһыған йәш егет - Рәшит һүҙ магияһын аңғармай, "Йөрәк" шиғырын: "Йыртып астым күкрәгемде, йолҡоп алдым йөрәгемде", - тигән шомло һүҙҙәр менән башлай. Был - алда әйтеләсәккә ишара. Һәр ваҡыт уйлап һөйләү зарур. "Һүҙ һүҙгә китер, һүҙ башҡа етер; һүҙҙең ҡанаты бар" кеүек әйтемдәренә халҡыбыҙ ҙур мәғәнә һалған. Айырыуса ҙур остазлыҡ менән тыуҙырылып, шиғри ағымға, урғылышҡа, шарламаға әүерелгән һүҙҙәр тормошҡа ашыусан. Аҡыл эйәләренең аҡылынса ла һүҙҙәр һәм фекерҙәр матдиләшеүгә булдыҡлы. Халыҡ шағиры Рауил Бикбаев иһә Рәшиттең маһирлығын, оҫталығын раҫлап, был шиғырға ошондай баһа бирә: "Һәр юлына, һәр һүҙенә әллә күпме ҡеүәт, хәрәкәт, ғәйәт көсөргәнешле кисерештәр туплanған ун алты юллыҡ шиғыр бер уҡыуҙа уҡ ятланып алына. Ул шул тиклем тығыҙ әҙылған, һәр һүҙгә шунан да күберәк уй-кисерештәр һыйҙырыу, уларға шунан да тосораҡ йөк һалыу, уларҙы шунан да нығыраҡ егеү, минеңсә, мөмкин булмаған хәл". Эйе, был шиғырға хайран ҡалырлыҡ ҙур ҡеүәт, хатта ки йәшерен көс һалынған. Уның ни хәтле ҡөҙрәтлелеген күптәр төшөнөп тә етмәйҙер. Ул - хәс тә тылсымлы доға, мөғжизәле ырым!

- Атай, тимәк, шағир шиғырын илаһи ҡөҙрәт, дарман менән һуғарған, уны сихри осошҡа эйә иткән, - тине Илнур хистәрен тыйып тора алмай. - Тылсым, тигәндәй, телгә алғанымса, поэзия үҙе тулыһынса магиянан тыуған һәм үҫкән. Аһәңле шиғыр үҙе уҡ - әпсен-төпсөн, ырым, арбау! Шағир иһә - арбаусы, күрәҙәсе, им-том итеүсе, өшкөрөүсе! Шуның менән, йәғни тылсымлы һүҙ, сихри көс менән ул уҡыусыларын үҙенә ҡарата, әүрәтә, имләй, уларҙың күңелен, зиһендәрен биләй, фиғелен буйһондора.

**(Дауамы бар).**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




**Баймаҡ ягындағы был мәрәкәле хәлдәрҙе Икенсе Этҡол ауылынан Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ һөйләне. Гәзит уҡыусылар был уҙаманды "СМС-әйтеш" конкурсының бер нисә тапҡыр еңеүсеһе Айытҡужа сәсән итеп тә белә.**

### Үҙемдеке

Сәғәҙәт тракторы менән кешегә бесән алып килеп һыйланған. Аҙ булып ҡалғас, Илгиз ағайҙың кәртәһе артында ятҡан утындың тағып алып китеп, бер литрға һатҡан. Шунан Илгиз ағайға килеп:

-Ағай, бына һыйым, үҙеңдеке күреп эс, - тигән.

Илгиз ағай "кусты алып килгән нәмә үҙемдеке инде" тип, тегене маҡтай-маҡтай һыйлана икән. Береһен бушатып, икенсеһен башлағас, Сәғәҙәт серҙе асып һалғас:

-Ҡустым, шым, үҙемдеке икәнен еңгәң белеп ҡалмаһын, - тигән Илгиз ағай.

### Ишетмәгәс...

Әхмәтдин ҡоҙа ологайғас ҡолаҡҡа ҡатыланды. Яҙ көнө, ишетмәһә лә, һуйырға һунарға барырға булған. Ҡоҙағыйҙы эйәрткән дә, төндә Бөркөт яланының башына киткәндәр. Үҙе ишетмәгәс, һуйыр ҡыҫҡырһа, әйтерһең, тип, ҡатынын киҫәтеп ҡуйған.

Үҙе алдан атлай, ҡоҙағый артынан юрғалай, ти. Бара бирә лә, туктап, ҡатынынан һуйыр ҡыҫҡырамы икәнен һорашып ала икән.

Шулай йөрөй торғас, ҡапыл һуйыр һупылдап осоп киткән. Ҡоҙа ҡоҙағыйҙы "Нинә ҡыҫҡырғанын әйтмәнең?" тип әрләй башлаған. Ҡоҙағый "Әйтергә, уның тауышын белмәйем дә инде..." тип яуап биргәс:

- Белмәгәс, башта уҡ әйтер кәрәк ине, үҙем тыңлар инем, - тип ҡуйған.

- Әйтергә, үҙең ишетмәгәс, - тип ҡуйған йәнә ҡатыны.

- Ишетергә, үҙең әйтмәгәс, - тип йәнә ҡарған ире.

Был бәхәс ни менән бөткәндер, һәр хәлдә, һаҡ ҡолаҡ һуйырҙар уларҙы ишеткәндер.

### Тапҡыр яуап

Совет заманында кеше хатта мотоцикл да һатып ала алмай торғайны. Хәҙер генә уны һанламайҙар. Матайҙы мал һатып, аҡса йыйып, икеләтә ҡыйбат хаҡҡа ала торғайнылар. Уныһында ла иркенләп йөрөү ҡайҙа. Аҙна һайын ауылдарға милиция килеп, мотоциклдарға облава яһай. Бесәндән ҡайтып килеүселәрҙе ауыл осонда һағалайҙар. Китә баҫтырыш. Тотһалар, бензинын ергә түгәләр ҙә, мотоциклды машинаға тейәп, Баймаҡҡа алып китәләр. Эйәһе, барып, штрафын түләп алып ҡайта.

Әхмәтдин ҡоҙа ла ҡулдан "Иж" мотоциклы һатып алды. Бер көндө ул Баймаҡҡа китеп барһа, гаишник туҡтатып, башына каска киймәгәнгә бәйләнә икән. Ҡоҙа һүҙгә аптырамай торғайны.

- Эйе, ҡустым, бына Баймаҡҡа каска алырға килеүем, - тип яуап биргән.

Милиционер танытмаһын һорағас:

- Мотоцикл һатҡан урыҫ уныһын бирмәне шул, - тип яуаплаған ҡоҙа.

Тегенеһе хахылдап көлгән дә, ҡоҙамды ебәргән.

### Ашамайса ашаған

"Эт ялаған" тигән яланда ер һөрәбеҙ. Илгиз ағай "эш бар" тип гаражда ҡалғайны, һунлап, бик һалмыш килде. Илгиз ағай һәр тракторҙың алдына төшөп, бураҙнаһы боҙоп бөтөрҙә. Бер аҙ йөрөгәс, кабинаһында ултырып йоҡланы. Төшкө аш килгәс тә, ағайҙы уятып булманы. Мин үҙебеҙ ашаған иттәрҙең һөйәктәрен йыйып алдым да, уның кабинаһына индереп һалдым.

Бер ваҡыт Илгиз ағай уянған, минә ҡул болғай, "Ашарға килдеме?" тип һорай. "Килде, ашын ашаманың, күп итеп ит алып, кабинаңа инеп киттең бит", тип яуап бирҙем. Ул аяғы аҫтын ҡараны ла:

-Эйе, ҡустым, шулай, ашағанмын икән, - тине

Шул ваҡыт эргәбеҙгә мотоцикл менән бригадир килеп туҡтаны. "Ашарға килтерҙеләрме?" тип һорай. "Килде, ҡустым, килде, бик мул булды ", тип яуап ҡайтарҙы барыбыҙ өсөн дә Илгиз ағай.

Икенсе көндө ағайға дөрөҫөн һөйләгәйнем:

- Әйтәм, бик хәлем бөткәйне шул, - тине.

### Өп-өр...

Әхиәр ағай күп ҡатын алып айырҙы. Һигеҙенсеме, туғыҙынсыһынмы алып ҡайтҡанда атаһының өйөнә килеп ингән дә:

- Атай, мин һиңә өп-өр яңы килен алып ҡайттым, - тип һөйөнсөләгән.

Исемен үҙгәрттем. Мәрхүм.

### Кәңәш

Көҙгө бысраҡ мәл. Рәхимйән еҙнәй ҡайтып инде лә: "Сылғаулап кейһәм дә, итек менән аяҡ өшөнә", - тигәйне:

-Сылғауыңды итегеңдең тышынан урап кейеп ҡара, - тип кәңәш бирҙем.

### Тағы нимә әйтәйем?

1969 йыл. Бикеш ауылында тракторсылар курсында уҡып йөрөгәндә ике туған Рафиҡ ағайымдарҙа фатирҙа торҙом. Ағайым да тракторсы булды. Ул көн һайын Леонид исемле тракторсы менән урманға йөрөй торғайны.

Бер көндө иртәнсәк сәй эсеп ултырһаҡ, Леонид килеп инде лә, "Доброе утро!" тигәйне, ағайҙың әсәһе Зөһрә инәй "Вечером приходи!" тип яуап бирҙе. Беҙ көлә башлағайныҡ:

- Тағы нимә әйтәйем? - тип һорап ҡуйҙы.

### 28 өйлөк ҙу-у-у-у-у-р ауыл

Колхоздың төҙөүселәр бригадаһы Бөрйән районына, Бетерә йылғаһы буйына мүк йыйырға киткәндәр. Һәр ваҡытта була торған хәл, улар яңылыш юлдан китеп, аҙашып, Иһәнғәзе (Күскәрбәк) ауылына барып сығып, йоҡларға ҡалғандар.

Ауылда 12 генә йорт булған. Иртәгеһенә ауыл магазинына ингәндәр.

-Ауылығыҙ ҡалай бәләкәй генә ул, - тигән юлаусыларҙың береһе һатыусы ҡыҙға.

-Беҙҙең ауыл элек ҙу-у-у-у-у-у-р булған, - тип бирешергә теләмәгән һатыусы ҡыҙ.

-Нисә өй булған һуң элек? - тигән юлаусы.

-28 өй, - тип яуаплаған һатыусы.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

**(Аҙағы. Башы 18-19-сы һандарҙа).**

## ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЯҘЫУСЫЛАР...
## халыҡ күңелен күрҙе



**Күптән түгел Әбйәлил районы Хәмит ауылында булып үткән күңел байрамынан хисләнеп, дәртләнеп: "Аһ-аһ, ҡайһындай ябай, алсаҡ, ҡунаҡсыл икән был хәмиттәр!" - тип ҡыуанышып таралыштыҡ.**

Баш ҡала ҡунаҡтары - прозаиктар Сабир Шәрипов, Мөнир Ҡунафин һәм йәш шағир Рәшит Зәйнуллин хәмиттәр менән күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшкән беренсе тере яҙыусылар булып сыҡты! Барыһына ла Мөнир Ҡунафиндың Президент грантын алған "Йәҙөп барған, ти, аттар дингеҙҙә..." әҫәре сәбәпсе. Был повесть тураһында матбуғатта ла, әҙәбиәт донъяһында ла һүҙ күп булды, әле лә булыр, тип уйлайым, әммә хәмиттәрҙең - уҡыусы балаларҙың да, ябай ауыл кешеләренең дә - повесть тураһындағы фекерҙәре, уйтеләктәре Мөнир өсөн бөтә тәңкитселәрҙең баһа-анализдарынан да ҡәҙерлерәктер, тип уйлайым үҙемсә...

Был тиклем дә ябай, йылы, ихлас мөхиттә үткән осрашыуҙа булғаным юҡ ине. Сама менән генә үҙ-ара мәрәкәләшеп тә, тыйнаҡ ҡына көлөшөп тә, ваҡыты менән күңелдәре тулып китеп, һиҙҙермәскә тырышып, күҙ төптәрен һөрткөләп тә... эй ихлас тыңланылар әҙип һүҙен хәмиттәр! Тәүҙә мәктәптә Мөнирҙең әҫәре буйынса асыҡ дәрес булды, унда 9-11-се синыфтар һәм мәктәп уҡытыусылары ҡатнашты. Иң ғәжәпкә ҡалдырғаны - бында егеттәр баш икән дә! Хәмит урта мәктәбендә тос ҡына итеп үҙ фекерен сатнатып әйтә белгән егеттәр күп, афарин!

Осрашыуҙың икенсе өлөшөндә клубта ауыл халҡы менән әңгәмәләшеү булды. Башҡа ауылдарҙан айырмалы рәүештә, хәмиттәр беҙҙе халыҡҡа ҡара-ҡаршы ултыртып, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләштерҙе. Был алым да бик ятты күңелгә. Күҙҙәрҙән - күҙҙәргә, йөрәктән - йөрәккә барып етте һәр һүҙ... Биш сәғәт бер минут кеүек тә тойолманы. Бер кем, ялҡтым, тип сырайына ла сығарманы... Иҫ киткес түҙемлек менән һәр береһен тыңланы, һәр ҡайһыһына һүҙ бирҙе, матур ғына итеп күтәрмәләп ултырҙы, тыйнаҡ ҡына итеп баһаләшеп тә алды. Мөниргә әҫәренең ыңғай яҡтарын ғына түгел, етешһеҙ яҡтарын да әйтеүселәр булды. Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзалары прозаик Иҙрис Ноғоманов, шағир Зөлфирә Ҡарағужина, шулай уҡ әҙәби иждатан алыҫ тормаған Радик Өмөтҡужин, Флүрә Низамова, Зөһрә Усманова һ.б. фекер алышыуҙа ихлас ҡатнашты. Күңелдәр серләште...

Беҙҙе ихлас итеп ҡабул иткән, осрашыуҙы юғары кимәлдә ойошторған, башынан аҙағына тиклем бергә булған ауыл хакимиәте башлығы М. Мөлөковка, йәш кенә булһа ла бик аҡыллы, тәрән фекер йөрөтөүсе мәктәп директоры Ғ. Һаҙыевка, мәктәп һәм ауыл китапханалары Гөлнур һәм Гәҙилә Баһауетдиноваларға, бөтәбөтә мәктәп уҡытыусыларына ысын күңелдән ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ! Үҙ таш булмәләрегеҙҙә генә ятып яҙышмай, бына шулай ауылдарға күберәк сыҡһағыҙ ине, яҙыусылар!

**Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА.**

✓ Ҡайһы бирәүҙәрҙең организмында паразиттар йәшәй. Әгәр кеше аллергия менән яфаланһа, тиктомалға ябыҡһа йәки тәненә сабыртмалар сыҡһа, мотлаҡ табип-инфекционистҡа күренергә кәрәк.



ИНТЕРНЕТТАН



# ТАҒЫ ЛА...
## шәкәр тураһында

■ Тиҙ арала шлактарҙан таҙарынырға тәҡдим итә беҙгә төрлө рекламалар. Ә бына рәсми медицина шлактар барлығын танмай. Ғәҙәттә, организмды таҙартыу тураһында һүҙ барғанда эсәктәрҙе таҙартыу күҙ уңында тотола. Йәнәһе, эсәктәрҙә лайла, таш йыйыла һәм улар үҙенән-үҙе сығарылмай, шуға ла таҙартыу саралары, мәҫәлән, клизма йәки дарыуҙар кәрәк. Монодиета организмды таҙартмай, әммә стресс тыуҙырып, матдәләр әйләнешен боҙоуы ихтимал. Заман медицинаһының бер ысулы ла, мәҫәлән, УЗИ йәки колоноскопия кеше тәнендә бер ҡурҡыныс таш та тапмай. Кеше организмы даими таҙарынып тора һәм тарҡалыу продукттары бер ҡасан да эсәктә оҙаҡ ятмай. Организмды таҙартыуҙың иң ябай ысулы - әүҙем тормош, дөрөҫ туҡланыу, һыуҙы күп эсеү.

■ Шәкәрҙең зыянлы ризыҡ икәнен барыһы ла белә. Шәкәр ашағандан һуң зур күләмдә энергия бүленә, аҙ хәрәкәтләнгән кешеләр уны ҡулланып та бөтә алмай. Әммә һимеҙлек - шәкәрҙең берҙән-бер бәләһе түгел. Уны артыҡ ҡулланыу хатта психик тайпылыштарға алып килеүе бар. Кеше көнөнә 9 балғалаҡтан артыҡ шәкәр ашаһа, ҡанда холестерин күбәйә, был иһә йөрәк ауырыуҙарына килтерә. Кәнфит, печенье, татлы һыуҙар ҡанда шәкәр күләмен арттыра. Был гел генә ҡабатланһа, шәкәр диабеты сиренә юлығыу хәүефе бар. Шәкәр глюкоза һәм фруктозанан тора. Глюкоза организм өсөн кәрәк, әммә бында ла сама белеү мөһим, ул артыҡ булып китһә, май ҡатламдары барлыҡҡа килә. Фруктоза менән эш ҡатмарлыраҡ. Ул организмға әллә ни файҙа килтермәй, әммә уның зыяны ҙурыраҡ. Фруктоза бауырҙа үҙләштерелә һәм унда майға әйләнә. Май бауырҙа йыйылып, бауыр дистрофияһына килтерә. Алкоголь менән артыҡ мауығыу ҙа ошондай уҡ һөҙөмтәләргә алып килә. Һуңғы 50 йылда донъяла шәкәр ҡулланыу ос тапҡырға артҡан.

■ Микроорганизмдар беҙҙе уратып алған һәм улар беҙгә ҡарағанда ла күп. Әммә уларҙың 1-2 проценты ғына иммунитеты яҡшы кешегә зыян килтерә ала. Тимәк, гигиена ҡағиҙәләрен тотҡанда, микробтар ҡурҡыныс түгел. Ғалимдар шулай уҡ ҡайҙа микробтар күберәк икәнен асыҡлаған. Бактериялар аш бүлмәһенең кран аҫтындағы торбаһында, һауыт-һаба йыуыу өсөн ҡулланылған губкала күп була. Сүп биҙрәһен дә йыш ҡына йыуып торорға кәңәш итә белгестәр. Һыуыткыс, башҡа көнкүреш техникаһының тотҡаларында ла микробтар күберәк була икән. Кер йыуыу машинаһы ла бактерияларға "бай". Шулай уҡ автомобилдәр ҙә хәүеф тәркөмөндә. Ә бына кеше тәнендә иң күп бактериялар ҡулдан алып терһәккә тиклемге өләшөндә. Унда яҡынса бактерияларҙың 44 төрө осраған. Тикшеренеү барышында экспериментта ҡатнашыусыларҙың барыһы ла бер уҡ төрлө һабын менән йыуынған, иң аҙаҡҡы көндә бөтөнләй һабын ҡулланмаған. Һөҙөмтәлә 100-гә яҡын төр микроорганизм табылған. Уларҙың иң күбе беләҙектән терһәккә тиклем "йәшәгән". Ысынлап та, ҡулдарҙы йыуғанда күптәр ҡулдарҙы беләҙеккә тиклем генә йыуа. Ғалимдарҙы тағы ла шул аптыратҡан: ҡоро тирегә ҡарағанда майлы тирелә бактериялар аҙыраҡ булып сыҡҡан. Ә иң таҙа урын - ҡолаҡ арты. Унда 15 төргә яҡын бактерия осраған.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Яҙғы ташҡындар яҡынлашыу менән санитар-эпидемиологик хеҙмәттәр төрлө инфекцияларҙың таралыуына юл ҡуймау өсөн иҫкәртеү сараларын башланы. Сөнки совет власы ойошторолоуҙан алып халыҡ һаулығы тураһында хәстәрлек иң алғы планға ҡуйыла, ул ваҡытта Өфөлә ҡала халҡы араһында холера һәм сабыртмалы тиф сирҙәре киң таралған була. Ошо сирҙәрҙе дауалау маҡсатында 1910 йылда республикала беренсе инфекцион дауалау учреждениеһы асыла. 1915 йылда уға инфекцион дауахана исеме бирелә һәм ул бөгөнгәсә ошо атамаһын һаҡлап килә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында иһә бында яралы һалдаттарҙы дауалау өсөн госпиталь ойошторола. Һуғыштан һуң дауахана киңәйтелә, 1957 йылдан алып ул оҙаҡ йылдар сыҫҡан биҙгәген диагностикалаусы һәм дауалаусы берҙән-бер дауахана булып тора. 1981 йылда унда заманса аппаратура менән йыһазландырылған реанимация хеҙмәте ойошторола. Бөгөн учреждениела дөйөм алғанда 510 урынға иҫәпләнгән 12 клиник, шулай уҡ 4 практик бүлек бар. Бөгөн редакция ҡунағы - баш ҡаланың 4-се инфекцион клиник дауахананың баш табибы Радик ҒӘЛИМОВ менән сәләмәтлегебеҙгә хәүеф янаған йоғошло ауырыуҙар тураһында һөйләшәбеҙ.**

# ИНФЕКЦИЯЛАР ҘА ЙОҠЛАП АЛА...



**➔ Замандар үткән һайын ауырыуҙар ҙа арта, элеккеләре мутациялана, яңылары "тыуа" икәнен беләбеҙ. Һеҙ етәкләгән дауалау учреждениеһына бөгөн ниндәй сирләләр мөрәжәғәт итә?**

- Беҙгә төрлө йоғошло сирҙәр менән килеп эләгәләр, әммә төп проблема - ул эсәк инфекцияһы. Ауырыуҙарҙың 60 проценты ошо диагноз менән эләгә, был патология балаларҙа ла күҙәтелә. Элегерәк эсәк инфекцияһының сәбәбе булып бактериялар (сальмонеллез, дизентерия, эшерихиоз һ.б.) тора тип һаналһа, ПЦР, ИФА кеүек яңы аппаратуралар ҡулланыу һөҙөмтәһендә азыҡ-түлек аша ғына түгел, ә һауа-тамсы юлы һәм һыу аша таралыусы вирус инфекцияларын да (норовирус, ротовирус, астровирус һ.б.) асыҡлайбыҙ. Бығаса улар киҫкен респиратор инфекциялар тип ҡаралһа, яңы технологиялар индереү һөҙөмтәһендәге тикшереүҙәр буйынса уларҙы вирустар тыуҙырған эсәк инфекцияһы тип диагностикалайбыҙ.

Халыҡ араһында сыҫҡан биҙгәге (бөйөр синдромлы геморрагик биҙгәк - ГЛПС) атамаһы аҫтында таралған сир бығаса миҙгел ауырыуы тип иҫәпләнһә, бөгөн был диагноз йыл әйләнәһенә ҡуйыла. Нигеҙҙә, урта йәштәрҙәге ир-ҙәр сирләй, сөнки улар тәбиғәт ҡосағында булырға, балыҡҡа, һунарға, ял итергә йөрөргә әүәҫ. Ә ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар һирәк ауырый. ГЛПС сиренең сығанағы - ҡала эргәһенә яҡын булған районлар (Иглин, Нуриман, Ҡырмыҫҡалы, Өфө, Кушнаренко һ.б.) һәм йүкә ағасы күпләп үҫкән территориялар. Сөнки сыҫҡандар йүкә ағасының орлоғон ярата һәм ошондай территорияларҙа күберәк үрсей. Яҙғы ташҡын осоронда ГЛПС артҡанмы, юкмы икәнен күҙаллауы ҡыйын, ауырыу бит йылдыҡ йылға тура килмәй, бер йыл аҙ булһа, икенсе йылына артыуы ихтимал. Әлегә хәл-торош тотороҡло, сыҫҡан биҙгәге менән ауырыусылар булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы күп тип әйтеп булмай. Шулай уҡ май-октябрь айҙарында талпан энцефалиты менән дә мөрәжәғәт итәләр. Санитар гигиена буйынса хеҙмәттәр даими рәүештә профилактик саралар уҙғара, шуға күрә хәл-торош киҫкен булыр тип уйламайбыҙ.

Уҙған көҙҙән алып апрелгәсә N1H1 - сусҡа киҙеүе менән сирләүселәрҙе дауаланыҡ. Нигеҙҙә, вирусҡа ҡаршы прививка яһатмаусылар сирләне, ауыр хәлдәгеләр ҙә күҙәтелде, әммә улар барыһы ла һауыҡты.

Бөгөн шулай уҡ тропик сирҙәр ҙә асыҡлана. Йәйге отпускылар мәлендә кеше әүҙем ял итә, сит илдәргә йөрөй, һөҙөмтәлә ситтән ауырыу эләктереп ҡайта. Шуға, һирәк булһа ла малярия, денге ауырыуҙары килеп осрай.

**➔ Бөгөн вируслы гепатит менән сирләүселәр күп. Ул ни кимәлдә хәүефле сир һәм ниндәй категория халыҡ өсөн хас?**

- Был сирҙең ос төрө бар. А төрө һыу, аҙыҡ-түлек аша йоға, эсәк инфекцияһына оҡшаш симптомдар күҙәтелә һәм дауалауға еңел бирелә, еңел үтә. В гепатиты парентераль юл менән тапшырыла, йәғни инъекция, операциялар ваҡытында ҡан аша күсеүе мөмкин, икенсе юлы - енси бәйләнеш аша йоға. С гепатиты ла В гепатитына оҡшаш, был ике төр, нигеҙҙә, бауыр циррозына алып килә. Былдай сирләр башлыса наркомандар, асоциаль тормош алып барыусылар. Бигерәк тә В, С төрҙәре вич-инфекциялылар араһында күп, ә вич-инфекция йөрөтөүселәр һаны көндән-көн арта. Шуға күрә В, С гепатиты ла арта бара.

**➔ Көнкүрештә башҡа инфекциялар менән сағыштырғанда ябай кеүек күренгән ангина менән сирләүселәр ҙә бихисап. Улар, ғәҙәттә, үҙаллы дауаланырға ярата. Шул уҡ ваҡытта ул да йоғошло ауырыу тип һанала...**

- Ангина, ябай кеүек күренһә лә, мәкерле сир. Ваҡытында дауаламағанда, ул пиелонефритҡа, миокардитҡа, ревматизм ауырыуҙарына алып килеүе, организмдың төрлө өҙлөгөүҙәренә сәбәп булыуы мөмкин. Икенсе яҡтан, кеше үҙаллы дауалана ла, организмдан микроб сығып бөткәнме, юҡмы, тикшереп тормай, хәле бер аҙ еңеләйһә, дауаланыуын туктата. Ә микроб бер аҙ хәл алғас, тағы ла үҙенең мәкерле эшен башҡара. Шуның өсөн ангина ваҡытында ла сифатлы дауаланыу мотлаҡ.

**➔ Инфекциялар ныклы дауалау һөҙөмтәһендә юҡҡа сығамы, әллә ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыу өсөн бер ни тиклем ваҡыт йәшеренеп кенә торамы?**

- Бер генә инфекция ла үҙенән-үҙе юҡҡа сыҡмаған, улар йәшеренеп ята ла, уңайлы мөхит булһа, ҡабат үҙенең барлығын белдерә. Элек быума йүтәл менән килеп эләккән балалар бармаҡ менән генә һанарлыҡ булһа, хәҙер бокс бүлектәре туп-тулы. Быһын сәбәбе - ҡасандыр ата-әсәләре "һары матбуғат" пропагандаһына әйәреп, балаларына прививка эшләтеүҙән баш тартҡан, бөгөн килеп сабыйҙар яфалана. Был ауырыу ниһмәне менән хәүефле - нигеҙҙә, бәләкәй балалар ауырый һәм озайлы йүтәл тын алыуҙың туктарлыуына килтереүе мөмкин. Шуға күрә, ата-әсәләрҙе ваҡытында профилактик прививкалар эшләтеүҙән баш тартмаҫҡа саҡырам.

**➔ Һәр кешелә паразиттар йәшәй һәм улар төрлө ағзала булыуы мөмкин, тиҙәр...**

- Барыһында уҡ булмаһа ла, ҡайһы бирәүҙәрҙең организмында, ысынлап та, паразиттар йәшәй. Әгәр кеше аллергия менән яфаланһа, тиктомалға ябыҡһа йәки тәненә сабыртмалар сыҡһа, мотлаҡ табип-инфекционистҡа күренергә кәрәк. Беҙҙә махсус лаборатория бар һәм һәр кемгә тәғәйен дауалау табырға мөмкин. Әгәр ауырыу йүнәлтмә менән килһә, уны дауаханаға һалып, дәүләт гарантияһы программаһы буйынса медстраховка фонды аша тикшерәбеҙ һәм дауалайбыҙ. Әгәр кеше шәхсән үҙ теләге буйынса мөрәжәғәт итһә, хеҙмәттәр түләүле.

**➔ Оптималләштереү еле медицина учреждениеларына ла ҡағылды һәм улар йә ябылды, йә ҡушылды. Элек һәр районда булған йоғошло ауырыуҙар бүлектәре һаҡланып ҡалдымы, әллә улар ҙа оптималләштереү ҡорбанына әүерелдеме?**

- Бөгөн ҡайһы бер райондарҙа бындай бүлектәр юҡ, ҡайҙалыр ике районға бер бүлек ҡалдырылды. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк - инфекцион бүлек булһын өсөн мотлаҡ булған шарттар һәм талаптарҙың үтәлеүе шарт. Әгәр шарттар юҡ икән, был бүлектең булмауы яҡшыраҡ. Ләкин беҙ диагностика мәсьәләһе буйынса тотош республиканы хеҙмәтләндерәбеҙ, быһың өсөн махсус санавиация хеҙмәте бар. Әгәр ауыр сирле булһа, санавиация хеҙмәте табиптары тиҙ генә юлға йыйына һәм кәрәкле урынға барып, ярҙам күрһәтә, консультация үткәрә. Сирләнең хәле тотороҡло булғанда, ул урындағы табиптар күҙәтеүенә ҡалдырыла, ауыр хәлләләрҙе беҙҙең дауаханаға алып киләләр.

**➔ Йоғошло ауырыуҙар менән сирләмәҫ өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?**

- Инфекцион ауырыуҙар ғына түгел, барлыҡ сирҙәр ҙә кешенең иммунитетына бәйле. Шуға күрә, йәштән уҡ үҙеңде сыныҡтырырға, физкультура һәм спорт менән шөғөлләнергә, профилактик прививкалар яһатырға, сәләмәт тормош рәүеше алып барырға, асоциаль күренештәрҙән алыҫ йөрөргә кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Әгәр мөнәсәбәттәрегеҙҙе һаҡларға теләһәгеҙ, мөхәббәтте һаҡларға кәрәк. Уның өсөн партнерҙарҙың береһе икенсеһен үҙгәртергә тырышырға тейеш түгел. Юғиһә бик йыш мөнәсәбәттәр айырылышыу менән тамамлана.*



*ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ*

# ОРСОҠТО ОНОТМАНЫҠ ӘЛЕ



**Ошо көндәрҙә беҙ Салауат районы Башҡорт Илсекәйе мәҙәниәт йортона Мөрсәлим ауылы биләмәһендәге өс ауыл халҡының осрашыуына йыйылдыҡ һәм тамашасылар иғтибарына "Орсоҡ өмәһе"н тәҡдим иттек.**

Байрамды Мөрсәлим ауыл биләмәһе башлығы Альберт Ямалетдин улы Садиҡов асып ебәрҙе, "Орсоҡ өмәһе"ндә ҡатнашыусыларға уңыштар теләне. Шулай уҡ Мөрсәлим ауылы ағинәйе, ветерандар советы рәйесе Финзира Надир ҡыҙы Булатова ҡотлау һүҙҙәре менән сығыш яһаны.

Сараны әҙерләп алып барыусы тәүҙә һарыҡ йөнөнөң файҙаһы тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт еткерҙе: "Һарыҡтың ите, йөнө, тиреһе - барыһы ла файҙалы. Борон йөндән кейеҙ һәм тула баҫып, тирмә ҡорғандар, кейем теккәндәр. Йәш килендәрҙең бирнәһендә һарыҡ йөнөнән эшләнгән зиннәтле баластар булһа, егеттәр ҡалымды һарыҡ менән түләгән. Малдың тиреһе дауа өсөн ҡулланылған, йәғни һалҡын тейҙергән кешене яңы һуйылған һарыҡ тиреһенә урап һалғандар, эс майын иретеп эсергәндәр, тәненә япҡандар. Сайырлы һарыҡ йөнөн һыҙлаған быуындарға япҡандар, баш ауыртҡанда мендәр эшләгәндәр".

Шыбаға тотошҡандан һуң, өс команда - Башҡорт Илсекәйе ауылынан "Орсоҡ", Мөрсәлимдән "Оҫта ҡулдар", Ҡарағол ауылынан "Йомғаҡ" командалары араһында ярыш башланды. Ҡатнашыусылар күмәкләшеп йөн теттеләр, ҡайһылары йөн иләне, сиратты, кемдер аяҡланы, кемдер ойоҡбаш ҡунысы ла бәйләп ҡуйҙы. "Алда булһа ҙур теләк, эштән йәм таба йөрәк", "Был донъяла ни татлы - йәнгә яҡын эш татлы" кеүек хеҙмәт тураһындағы мәҡәлдәрҙе иҫкә төшөрҙөләр. Көйәрмәндәр өсөн дә ҡыҙыҡлы һорауҙар, йомаҡтар тәҡдим ителде.

Ярыш тамам. Жюри ағзалары йомғаҡ яһағансы, "Эш бөткәс, уйнарға ярай" тигән мәҡәлгә таянып, уйнап-көлөп, бейешеп тә алдыҡ. Бына баһалама рәйесе Гөлсәсәк Сафинаға ярыш һөҙөмтәләрен иғлан итергә һүҙ бирелде. 1-се урында хужалар - "Орсоҡ" командаһы, 2-се, 3-сө урындарҙы Мөрсәлимдең "Оҫта ҡулдар" һәм Ҡарағолдоң "Йомғаҡ" командалары яуланы. Командаларға Маҡтау грамоталары һәм бүләктәр тапшырылды.

"Орсоҡ өмәһе"ндә ҡатнашыусы ағинәйҙәргә һәм уларҙы әҙерләүселәргә ҙур рәхмәт белдерәбеҙ. Йола тотҡан хур булмаҫ, ти халыҡ. Ысынлап та, милләтебеҙҙең рухи хазинаһын тәшкил иткән онотола барған йолаларҙы тергеҙеү, йәш быуынға күрһәтеү, иң мөһиме, дөрөҫ атҡарыу - мәҙәниәт йортонда үткәрелгән матур эштең төп маҡсаты ине. Артабан был эстафета Мөрсәлим, Ҡарағол ауылдарында ла дауам итәсәк.

**Зилә ИШМОРАТОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Алтынсы сер: мөхәббәттең ыңғай көсө

Балала яратыу тойғоһо ике йәштәр тирәһендә барлыҡҡа килә. Бына ни өсөн тап шул ваҡытта унда үҙ-үҙен яратыуға һәм үҙ-үҙен баһалауға иғтибар итергә кәрәк. Ул үҙен нисек бар - шулай ҡабул итеүҙәрен, яратыу йәки яратмау уның ғәмәлдәренә бәйле түгел икәнен аңларға тейеш.

Бик йыш йәш ҡыҙҙар үҙҙәрен нисек бар - шулай булғаны өсөн яратыуҙарын аңламай. Улар үҙҙәрен ятраҡан ир-атты табырға теләй һәм үҙҙәре ишетергә теләгән һүҙҙәрҙе әйткән беренсе осраған кешегә кейәүгә сыға. Ҡайһы бер ир-ат, уларҙың ошо кәмселеген күреп, быны оҫта файҙалана, уларға баҫым яһарға тырыша. Бындай ҡатын-ҡыҙ үҙен ысынлап ярата белмәгән өсөн, улар бала саҡта алып еткермәгән хуплау һәм яратыуҙы яулау өсөн бар көсөнә тырыша. Әммә һөҙөмтәлә йә судта айырылышыу килеп сыға, йә эскән һәм эмоциональ, физик йәки психологик бәғерһеҙ ир менән йәшәй. Әгәр балала бала саҡтан үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләгәндә, ул бындай яҙмышҡа дусар булмаясаҡ.

Мөнәсәбәттәрҙә мөхәббәтте һаҡлау зарур. Бының өсөн шуны аңлау мөһим: һеҙ икәү ниндәйҙер "татлы" пар түгел, ә романтикаға бай булғанда ла, ысынбарлыҡта ике төрлө кешене бер бөтөнгә берләштереү мөмкин түгел. Һеҙ - ике үҙ аллы шәхес, әммә уртаҡлыҡтарығыҙ ҙа бар. Һеҙ был донъяға айырым-айырым килгәнһегеҙ һәм айырым-айырым китәсәкһегеҙ.

Икенсе кешегә мәңгелек мөхәббәт вәғәҙә итеүҙә дөрөҫ түгел. Яратҡан кешеңдән бындай һүҙҙәр ишетеү, әлбиттә, күңелгә ятышлы, әммә быныҡ буш һүҙ икән дә онотмағыҙ. Сөнки мөхәббәт ул мәл һайын күҙәтелеп торған хис. Кисәге мөхәббәт үткән, иртәгәһе етмәгән әле, ә бөгөнгөһөнә лайыҡ булырға кәрәк.

Мөхәббәт партнерҙар үҙенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереп, мөнәсәбәттәрҙе һаҡлауға үҙ өлөшөн индергәндә генә йәшәй. Әгәр мөнәсәбәттәрегеҙҙе һаҡларға теләһәгеҙ, мөхәбәтте һаҡларға кәрәк. Бында никах килешеүе ярҙам итмәйәсәк. Мөхәббәтте һаҡлау өсөн партнерҙарҙың береһе икенсеһен үҙгәртергә тырышырға тейеш түгел. Бындай осраҡта, үкенескә күрә, бик йыш мөнәсәбәттәр айырылышыу менән тамамлана. Әгәр һеҙ партнерығыҙға үҙенсәлеген ирекле асыу мөмкинлеген бирһәгеҙ, мөхәббәттән, романтиканан, дәрттән мәхрүм ҡалмаҫһығыҙ. Әгәр мөнәсәбәттәр нигеҙһеҙ һәм аҡылһыҙ талаптар һәм өмөттәр менән сикләнмәгән икән, улар яҡын һәм ышаныслы була. Үҙегеҙҙе ни тиклем ирекле тояһығыҙ, партнерығыҙҙы ла шул тиклем ныҡыраҡ баһалайһығыҙ. Ысын мөхәббәт ысын азатлыҡҡа бәйле. Бары тик ысынлап азат булыусылар ғына бер ниндәй шарттарһыҙ ҙа ярата ала.

Буш ваҡытығыҙҙы һеҙ икегеҙгә лә ҡәнәғәтлек килтергән ғәмәлдәр менән үткәрергә тейешһегеҙ. Был күңелһеҙләнеүҙән арындыра һәм мөнәсәбәттәрҙе йәнләндерә. Бында мөнәсәбәттәрҙең романтикаһын һаҡлау зарур. Романтикаһыҙ кеше тормошо ғәжәпләнеүҙән мәхрүм. Бына ни өсөн был хаҡта онотorға ярамай. Романтика ғәжәпләндерә һәм кеше тормошона улар хыялланған хәл-торошто һәм ваҡиғаларҙы тартып килтерә. Беҙ романтикаһыҙ йәшәй алмайбыҙ һәм уны тормошобоҙға индереүселәргә рәхмәтлебеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# КЕШЕЛӘРҘЕ РӘНЙЕТМӘЙЕК!

**Ҡайһы берәүҙәр: "Бына шул кешегә рәнйегәйнем, өйө янып киткән, балаһы ҡаза күргән", - тип, маҡтанған кеүек һөйләп ҡуя. Шуның менән үҙенә әллә күпме гонаһ алғанын, тәкәбберлек әҙемтәләрен уйлап та тормай...**

